ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискә Өфө

26-1
июль - август
(майай - урағай)
2024
№29 (1122)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҙур сара көтөлә**



5

**Мутлашыусылар һаман мутлаша**



6

**Бала саҡ хыялы ине... балалар табибы булыу**



8-9

**"Көрьәнде тәржемәләргә... 12 йыл кәрәк булды", ти В. Порохова**



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Мөхәббәт ихтыярһыҙ булырға тейеш түгел, ул аҡыллы булырға тейеш. Был мөхәббәттең яратҡан кешеңдең дә, тирә-йүндәгеләрҙең дә етешһеҙлектәрен күрә, шуларға ҡаршы көрәшә белеү менән берләшкәнлеге шарт булыуын аңлата. Ул аҡыл, зарурҙы буш һәм ялғандан айыра белеү менән дә берләшергә тейеш. Ул һуҡыр булырға тейеш түгел.*

***Дмитрий ЛИХАЧЕВ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Сығарылыш уҡыусыларының юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеү этабы тамамлана. Улар күберәк ниндәй һөнәрҙәргә өҫтөнлөк бирә икән, шул турала бер кәлимә әйтһәгеҙсе?



***Рәмил ЗАРИПОВ, Башҡорт дәүләт аграр университетының ҡабул итеү комиссияһы секретары:*** Башҡорт дәүләт аграр университетына ҡабул итеү кампанияһы аҙағына ла етте. 25 июлдә бакалавриат һәм специалитет буйынса бюджет урындарына документтар ҡабул итеүҙең һуңғы көнө булды. Абитуриенттар университетҡа шәхсән килеп, сәғәт киске 5-кә тиклем, ә "Дәүләт хеҙмәттәре" аша төнгө 12-гә тиклем документтарын юллай алды. 27 июлдә университеттың рәсми сайтында абитуриенттарҙың рейтинг исемлеге элenә, ә 3 авгусҡа тиклем уларҙан документтарының төп нөсхәләрен алып килеп тапшырыуҙарын көтөп ҡалабыҙ. Шунан 6 августа яңы студенттар-ҙың исемлеге билдәле булып, бойороҡ сығасаҡ.

Университетыбыҙға уҡырға инергә теләүсе йәштәр араһында популяр һөнәри йүнәлештәр тураһында һөйләгәндә, уларҙың күбеһе электр энергетикаһы, электр техникаһы, геодезия һәм дистанцион зонд менән тикшереү, ветеринария, ландшафт архитектураһы, продукция технологияһы һәм йәмәғәт туҡланыуын ойоштороу кеүектәрен һайлай. Шуға 1 бюджет урынына 35-36 ғариза тура килә хатта. Дөйөм алғанда, университет буйынса 1 бюджет урынына 9-10 ғариза тура килә. Әйтергә кәрәк, быйыл беҙҙә бөтәһе 1440 бюджет урыны бар, шуның 1390-ы - юғары белем алыу йүнәлештәренә, ә 50-һе урта һөнәри белем алыуға тура килә. Бында шуны ла билдәләп үтеү мөһим: урта һөнәри белем биреү йүнәлештәрендә 15 авгусҡа тиклем абитуриенттарҙан ғаризалар көтөп ҡалабыҙ. Унда уҡыу өсөн Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырыу кәрәкмәй, ә аттестат буйынса уртаса балл ғына ҡарала.

Быйыл вузда яңы уҡыу йүнәлеше асылманы, ләкин 2025/ 2026 уҡыу йылына "Биотехнология" йүнәлешен асырға ниәтләйбеҙ һәм биолог, микробиолог һөнәренә уҡытасаҡбыҙ. Сөнки был фән һәм техниканың өҫтөнлөклө йүнәлештәренең береһе иҫәпләнә, микробиология һәм генетика өлкәһендәге белгестәр илебеҙгә кәрәк. Әлбиттә, бюджет урындары булдырыуҙы ла хәстәрләргә ниәт иткәнбеҙ.

Беҙҙең вузға күберәген үҙебеҙҙең республика балалары уҡырға килә, сөнки ауыл хужалығы тармаҡтары өсөн йүнәлтелгән университетта кәрәкле белгестәрҙе үҙебеҙ әҙерләйбеҙ. Шулай ҙа Силәбе, Ырымбур, Ҡурған, Свердловск өлкәләре, Ханты-Манси автономиялы округынан йәштәр белем ала, Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәренән дә ҡабул итәбеҙ, һәм быйыл хатта Африка илдәренән дә тиҫтәгә яҡын абитуриент ғариза тапшырҙы. Быйыл Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың балалары өсөн һәр уҡытыу йүнәлешендә бюджет урындарының 10 проценты бүленде. Улар БДИ тапшырмайынса, йәки университетта үткәрелгән имтихандарҙы ғына тапшырып уҡырға инеү мөмкинлегенә эйә булды. Шулай уҡ Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ла, срочный хеҙмәттә булып ҡайтҡан егеттәргә лә 10 балл өҫтәлә. Әлеге көндә бөтә йүнәлештәрҙә лә ғаризалар һаны етерлек, хәҙер документтарының төп нөсхәләрен алып килеүҙәрен көтөргә генә ҡалды.

Быйыл абитуриенттарҙың Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләре юғарыраҡ булыуы күренде, шуға БДИ-ның уртаса балы күтәрелер, моғайын. Ғөмүмән, уҡырға инеп китер өсөн кәмендә 160 балл булыр тип көтөлә. Беҙҙең университетта бар студенттарға ла иғтибар көслө, уҡытыу-тәрбиә эштәре лә юғары кимәлдә ҡуйылған. Бынан тыш, хәҙерге йәштәр барыбер ҙә юғары уҡыу йорттарын һәм белем алырға теләгән йүнәлештәрен маҡсатлы һайлай. Улар бында белем алып сыҡҡас, ҡайҙа барырҙарын алдан күҙалларға тырыша, һәр хәлдә, шуға ынтыла һәм илке-һалҡылыҡҡа юл ҡуймайҙар. Үҙ сиратыбыҙҙа беҙ ҙә сығарылыш студенттарының башланғыс хеҙмәт юлын йылдан-йыл нығыраҡ контролгә алырға, маҡсатлы йүнәлтмә биргән предприятиеларға мотлаҡ барып эшләүҙәрен күҙәтергә ынтылабыҙ. Ауыл хужалығы өлкәһенә дәүләт тарафынан артҡан иғтибар ҙа йәштәрҙе үҙебеҙҙең республика һәм ил өсөн кәрәкле белгестәр итеп тәрбиәләүгә булышлыҡ итә.

## МӘҘӘНИ МИРАҪ



# ҺЫУ БАШНЯҺЫ

**Өфөнөң Телеүҙәге артында, мосолман зыяраты территорияһында урынлашҡан, алыҫтан күренеп торған боронғо һыу башняһын белмәгән кеше һирәктер.**

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ул тиҫтәләрсә йылдар буйына ҡарауһыҙ торҙо. Ниһайәт, уның стеналарын күпләп төшөрөлгән граффитиларҙан өс көн буйына таҙарттылар. Бер үк ваҡытта ошо территорияны төҙөкләндереү эштәре башланды: коммуналь хеҙмәт эшселәре тарафынан ҡомартҡы грунттан таҙартылды, парковка зонаһына ҡом һалынды, биотуалет ҡуйыр өсөн майҙансыҡ әҙерләнде. Өфө ҡалаһының Ленин районы хакимиәте белдереүенсә, бында сүп-сарҙы сығарыу, ботаҡтарҙы киҫеү дауам итә. Элегерәк хәбәр ителгәнсә, хужаһыҙ ҡалған мәҙәни мираҫ объектын ҡала хакимиәте муниципаль милек составына индерәсәк һәм бында туристик арауыҡ булдырыласаҡ.

Әйткәндәй, 1901 йылда төҙөлгән һыу башняһы - Өфөнөң тәүге һыу менән тәьмин итеү системаһының хәҙергә тиклем һаҡланып ҡалған берҙән-бер объекты. Уҙған быуаттың 50-80-се йылдарында Башҡорт дәүләт университеты ошо башняны телескоп һәм башҡа ҡорамалдар менән йыһазландырылған обсерватория сифатында файҙаланған.

12+

***✓ "Республикабыҙға Урта Азия, айырыуса Үзбәкстандан ҡорттар килтереү яңы вирус таралыуға сәбәпсе булды, - тип яҙа автор. - Был сирле ҡорттар беҙҙең башҡорт һәм рус тоҡомло бал ҡорттарын һәләк итәсәк".***



БЫЛ АЙҘА...

**Урағай, йәйҙең һуңғы айы ла килеп етте. Йәйге мәл иҫәпләнһә лә, урағайҙа көҙ һулышы үҙен ныҡыраҡ һиҙҙерә башлай: көн ҡыҙыуы һүрелә бара, иртәле-кисле һалҡын төшә; аяҙ көндөң һәр сәғәтен файҙаланырға тырышып, ауыл хужалығы эшсәндәре уңыш йыя, кәбән-эҫкерт һала, механизаторҙар көн-төн комбайнда баҫыу диңгеҙен иңләй - уңышты юғалтыуһыҙ йыйып алырға тырыша. Нисек кенә моңһоу булмаһын, был айҙа ағас япраҡтары һарғайып, ҡойола башлай, үлән ҡыуара. Ай урталарында йылына ҡарап, ҡырау төшөүе ихтимал.**



# БАЛ БАҘАРЫ ГЕҮЛӘРМЕ?

Сәскә күп йылда бал да күп булыр ине, тик быйыл бал баҙарында тынлыҡ хөкөм һөрә, элеккесә бал йәрминкәләре геүләп тормай. Йәй башынан булмаһа ла, һәр хәлдә июль-август - тап балға бай осор булырға тейеш түгелме ни? Башҡортостан умартасылары көнөн **(11)** ошо осорҙа билдәләүҙең дә бер ғилләһе барҙыр бит, моғайын. Был йәһәттән умартасылыҡ мәсьәләләрендә һай йөҙгән ябай халыҡҡа әллә ни мәғлүм булмаһа ла, интернет сығанаҡтар күптән саң ҡаға: Башҡортостанға күпләп үзбәк бал ҡорттарын килтереү уларҙа хәүефле сир - нозематоза барлығын асыҡланы. Урындағы умартасылар был афәткә ҡаршы нисек көрәшергә лә белмәй, ти, мәсәлән, үҙ эшендә тәжрибәле белгес - урман бал ҡорттарын үрсетеү йәмғиәте координаторы Александр Соколов mkset.ru порталына интервьюһында. **АиФ-Өфө сайты үҙенең ошо йылдың 10 июнь сығарылышында Нуриман районы Ниселәр ауылы умартасыһы Данияр Камаловтың борсоулы хатын баҫа: "Республикабыҙға Урта Азия, айырыуса Үзбәкстандан ҡорттар килтереү яңы вирус таралыуға сәбәпсе булды, - тип яҙа автор. - Был сирле ҡорттар беҙҙең башҡорт һәм рус тоҡомло бал ҡорттарын һәләк итәсәк. Башҡортостанда йышайып киткән бындай контрафакт индереүҙәрҙе тикшереүҙә беҙгә ярҙам кәрәк. Ата-олатайҙарыбыҙҙың күп быуатлыҡ хеҙмәтен юҡҡа сығарып, данлыҡлы башҡорт балының юғалыуына юл ҡуя алмайбыҙ..."**

"Московский комсомолец-ӨФӨ" сайты (5 июль, 2024) хәбәрсеһе яҙып сығыуынса, тиҫтәләп йылдан һуң башҡорт бал ҡорттарының һаҡланып ҡалмауы ихтимал. Белгестәр раҫлауынса, ситтән килтерелгән ҡорттарҙағы вирус бик тиҙ таралһа ла, уның симптомдарын тиҙ генә асыҡлауы мөмкин дә түгел, шунлыҡтан был үлемесле сир бал ҡорттарын яйлап юҡҡа сығара бара. "Башҡортостан умартасылары" ойошмаһы советының ағзаһы, үҙ нәҫелендә бишенсе быуын ҡортсо Ильяс Исламғолов һөйләүенсә, был хәлгә Россельхознадзор тыйыу һалғанда һуң ине инде, сөнки был ваҡытҡа Рәсәйгә, шул иҫәптән Башҡортостанға ла сирле ҡорттар күпләп индерелгәйне.

Күрәһең, был кемдәр өсөндөр отошло, сөнки беренсенән, сит ҡорттар арзан тора, икенсенән, улар ҡышлауҙан иртәрәк уяна. Тимәк, был арзан, ләкин киләсәкһеҙ юлды һайлаған, бер көн менән эш итеүсе эшсем эйәләренә күберәк продукция алырға мөмкинлек бирә. Аҡсаға күҙҙәре тонған намыҫһыҙ бизнес эйәләренә иһә башҡорт бал ҡортоноң генетикаһы ни ҙә, иммунитеты ни... Сит дәүләттәр етештереүселәренә шул ғына кәрәк тә: Рәсәйгә күпләп бал ҡорто һатыу уларға миллиардлаған килем килтерә һәм бер кем дә унан баш тартырға йыйынмай. **Шулай итеп, Ильяс Исламғолов һөйләүенсә, бөгөн Башҡортостан умартасылары ике лагерға бүленгән: коньяҡ ҡорттарын республикаға индереүгә ҡырҡа ҡаршы тороусылар һәм Азия ҡорттарынан йәйге бер миҙгел эсендә бер нисә быуын ҡорт үрсетеп алыу яғын ҡайырыусы заводчиктар.**

Бөгөн Башҡортостан умартасылары йәмғиәте сиктәрендә урта рус ҡорттарын (ә башҡорт бал ҡорто тоҡомо уның популяцияһына ҡарай) тергеҙеү һәм таратыу буйынса эш алып барыла, ләкин әлеге лә баяғы сит-ят коньяҡ ҡорттар бизнесы изге һәм кәрәкле эште баҫып алып бара, шуға күрә был мәсьәләлә дәүләт тарафынан көйләү саралары талап ителә, сөнки мигрант ҡорттар баҫҡынсылығы Башҡортостан өсөн генә түгел, тотош ил күләмендәге бәлә. **Шулай ҙа Башҡортостан умартасылары ҡул ҡаушырып ултырмай, бөгөн республикала рөхсәтһеҙ юл менән мигрант ҡорттар индереүгә ҡаршы рейдтар үткәрелә, Башҡортостан сигендә һәм юлдарҙа ҡорт ташыусыларҙың документтары тикшерелә, тик барыбер, әле әйтелгәнсә, был эште федераль кимәлдә һәм ҡәтғи рәүештә ҡулға алыу талап ителә.**

...Ошо айҡанлы Башҡортостандың илһөйәр эшлеклеһе, башҡорт тоҡомло бал ҡорто өсөн йәнен-тәнен йәлләмәй халҡына эш күрһәтеп киткән биология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәгенә 1998 - 2020 йылдар буйы етәкселек иткән мәрхүм Әмир Ишемғолов хәтергә төшә. Ул иҫән булһа, башҡорт бал ҡорто бындай һәләкәт алдында торор инеме? Юҡтыр, һәр эштә лә үҙенең белеклеһе һәм фиҙаҡәрлеге, ныҡышмалылығы менән алдырыусы патриоты кәрәк шул...

**Был айҙағы күренекле көндәр:** РФ Ҡоралды көстәренең Тыл көнө **(1)**, Һауа-десант ғәскәре (Десантсылар) көнө **(2)**, Хиросима көнө. Ядро ҡоралын халыҡ-ара тыйыу, "Донъя табиптары - тыныслыҡ хаҡына" халыҡ-ара хәрәкәт **(6)** көндәре, М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры ойошторолоуға - **35 йыл (1989)**, Халыҡ-ара төп халыҡтар көнө **(9)**, Физкультурниктар **(10)**, Төҙөүселәр, БР Умартасылар **(11)** көндәре, РФ Хәрби-Һауа көстәре **(12)**, Терроризм ҡорбандарын иҫкә алыу **(21)**, РФ Дәүләт флағы **(22)** көндәре, Рәсәйҙең хәрби дан көнө, Совет ғәскәрҙәренең Курск һуғышында немец-фашистарын тар-мар иткән **(1943)**, Молдавияның баш ҡалаһы Кишиневты азат иткән **(29 август 1944)** көндәр, Муса Мортазиндың Айырым

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Сығарылыш уҡыусыларының юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеү этабы тамамлана. Улар күберәк ниндәй һөнәрҙәргә өҫтөнлөк бирә икән, шул турала бер кәлимә әйтһәгеҙсе?***



***Нурия КИНЙӘБАЕВА, РФ Хөкүмәте эргәһендәге Финанс университетының Өфө филиалы хеҙмәткәре:***

Беҙҙең уҡыу йортона абитуриенттарҙы ҡабул итеү бер ай элек башланды, тәүге көндән үк балалар һәм ата-әсәләр күпләп килә. Уҡыу йортонда юғары белем алырға ла, урта һөнәри белемгә эйә булырға ла мөмкин һәм бының өсөн ҡабул итеү комиссиялары ике урында айырым эшләне. Бөгөнгө көндә һәр йүнәлеш буйынса ла етерлек ғаризалар йыйылған, улар араһында Өфө ҡалаһы һәм республикабыҙҙың башҡа төбәктәренән, Татарстандан, Ырымбур һәм Красноярск өлкәләренән уҡырға инергә теләүселәр бар. Бында иҡтисад һәм бухгалтерия, финанстар, банк эше, юриспруденция, страховка эше, мәғлүмәт системаһы һәм программалау йүнәлештәрендә уҡырға мөмкин.

Әйтергә кәрәк, беҙҙең белем усағына 9-сы класты тамамлағандарҙы ла, 11-се кластан һуң да ҡабул итәләр. Күптәрҙе дипломда "филиал" тигән яҙыу булмауы, уның Мәскәүҙәге төп уҡыу йортон тамамлаған кеүек ҡабул ителеүе ылыҡтыра. Шуныһы ла мөһим: яҡшы өлгәшкән студенттар Мәскәүгә күсеп тә уҡыуын тамамлаған осраҡтар бар. Бюджет урындарына килгәндә, һәр бүлектә 25-30 тирәһе урын ҡаралған, коммерция шарттарында ла уҡырға була. Әлбиттә, быйыл да күптәр юриспруденция йүнәлешенә ғаризалар яҙҙы, киләсәген күҙаллаған йәштәр информацион системалар һәм программалау бүлеген дә иғтибарһыҙ ҡалдырмай. Дөрөҫөн әйткәндә, иҡтисад һәм бухгалтерия иҫәбенә уҡырға ингәндәр ҙә артабан оло тормош юлында юғалып ҡалмаҫаҡ: төрлө ойошмаларға ла тәжрибәле белгес кәрәк, үҙ эшендә асам тиһәң дә был өлкәлә белемле булыуың фарыз. РФ Хөкүмәте эргәһендәге Финанс университетының Өфө филиалында белем алған йәш белгестәргә уҡып бөтөү менән эш тәҡдим итәләр, береһе лә артабан ҡайҙа барырға тип баш ватып йөрөмәй.

Ҡабул итеү кампанияһын ойоштороуҙа ярҙам итеүсе булараҡ, үҙемдең күнелемә ятҡан матур күренештәрҙең береһе хаҡында ла әйтеп китәйем: уҡырға инергә теләп, ғаризаларын тапшырған төрлө милләт вәкилдәре араһында беҙҙең башҡорт балалары ла һис ҡалышмай, улар грамоталы ла, йөҙҙәре лә нурлы. Шуға уларҙы ваҡытында күреп, кәңәш-тәңәш итеп, йүнәлеш биреп ебәрә алыу һәм милли кадрҙар тәрбиәләүгә булышлыҡ итеү маҡсатында урта һөнәри белем биреү, юғары уҡыу йорттарында милләттәштәребеҙ күберәк эшләргә тейештер, тип уйлайым.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанға рәсми эш сәфәре менән килгән Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе урынбаҫары Марат Хөснуллин Өфөгә коньяҡтан инеү урынындағы Ағиҙел йылғаһы аша 1956 йылда төҙөлгән иҫке арҡалы күперҙе яңыртып төҙөү барышы менән танышты. Объект "Коньяҡ ҡапҡалар" проекты сиктәрендә капиталь ремонтлана. Күперҙең тарихи һыны, шул иҫәптән металл арҡаһы ла, һаҡланып ҡалған. Проекты тапшырғандан һуң ҡалаға инеү һәм сығыу өсөн барлығы 12 һыҙат булдырыла, был участкалағы хәрәкәт ҡатмарлыҡтарын кәметәсәк.

✓Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе урынбаҫары һәм Башҡортостан Башлығы Республика менән идара итеү үҙәгендә булды. Ҡунаҡҡа мөрәжәғәттәргә оператив яуап биреү һәм киҫкен мәсьәләләрҙе ваҡытында хәл итеү мөмкинлеген биргән "Инцидент менеджмент" һәм "Кире бәйләнеш платформаһы" мәғлүмәт системаларының эшен күрһәттеләр. Бында аҙнаһына 5 меңгә яҡын мөрәжәғәт эшкәртелә. "Һеҙҙең үҙәк - төбәк менән идара итеүҙә һанлаштырыуҙы һөҙөмтәле файҙаланыуҙың сағыу миҫалы. Бик ыңғай тәжрибә, һәм уны, һис шикһеҙ, бөтә илгә таратырға һәм ҡулланырға кәрәк", - тине Марат Хөснуллин.

✓Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе урынбаҫары Марат Хөснуллин Өфөләге Көрәш һарайының төҙөлөш майҙансығында ла булды. Төп залды һәм трибуналарҙы ҡарап, объекттың төҙөлөш барышы һәм архитектура-планлаштырыу проекттары менән танышҡас, ул: "Был донъя кимәлендәге объект. Ул илебеҙҙә лә, донъяла ла лайыҡлы урын аласаҡ. Бик яҡшы концепция, идеология һәм дөрөҫ ҡараш. Уның торлаҡ биҫтәһендә урынлашыуы һәм был биләмәләге халыҡты үҙенә тартып тороусы үҙәк буласағына мин айырыуса шатмын", - тип билдәләне.

✓Үткән аҙнала Сибайҙа Башҡортостандың иң көслө кешеләре ҡатнашлығында экстрим-шоу ойошторолдо. Ҡала халҡын һәм ҡунаҡтарын стронгмендарҙың мауыҡтырғыс көс шоу-программаһына саҡырҙылар. Башҡортостан бәһлеүәндәре 100 тоннанан ашыу ауырлыҡтағы ҙур габаритлы тәгәрмәсле техниканы буксировкалау буйынса Рәсәй һәм Евразия команда рекордын ҡуйҙы. Көс шоуы Сибайҙың үҙәк майҙанындағы "Урал арьяғы" күп функциялы комплексында үткәрелде.

✔ *Әлеге ваҡытта Джо Байден оҙаҡ икеләнеүҙәрҙән һуң киләһе срокка президентлыҡҡа һайланыуға көрәштән баш тартып, урынбаҫары - вице-президент Камала Харрис кандидатураһын хупланы.*



кавалерия бригадаһының Ҡыҙыл Армия яғына сығыуына - 105 йыл **(29 август 1919)**, Шахтерҙар **(25)**, Рәсәй киноһы **(27)**, Хәрби табип **(28)**, Ядро ҡоралын һынауҙарға ҡаршы халыҡ-ара көн **(29)**.

**Урағайҙа тыуғандар:**

**3 -** шағирә, журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ш. Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты **Тәнзилә Дәүләтбирҙинаға 60 йәш** (1964).

**4 -** прозаик һәм шағир, тәржемәсе, журналист, 1977-1998 йылдарҙа "Ағиҙел" журналының яуаплы секретары, баш мөхәррир урынбаҫары, баш мөхәррире, 1994-1998 йылдарҙа Башҡорт ырыуҙарының аҡһаҡалдар советы рәйесе, Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Булат Рафиҡовтың тыуыуына 90 йыл** (1934-1998).

**15 -** күренекле совет хәрби начальнигы, генерал-майор, 112-се легендар Башҡорт кавалерияһы дивизияһы командиры, Рәсәй Федерацияһы Геройы **Минлеғәли Шайморатовтың тыуыуына - 125 йыл** (1899-1943).

**17 -** журналист, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге журналистар премияһы лауреаты **Таһир Ишкининға - 60 йәш** (1964).

**20 -** сәнғәт эшмәкәре, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия театрының баш режиссеры, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, "Алтын битлек" премияһы номинанты **Айрат Абушахмановҡа - 50 йәш** (1974).

**22 -** күренекле дәүләт эшмәкәре, 1962-1986 йылдарҙа БАССР Министрҙар Советы рәйесе булып эшләгән, ике тапҡыр - Ленин ордены, ике тапҡыр Хеҙмәт Ҡыҙыл байраҡ ордендары, Октябрь революцияһы, Халыҡтар дуҫлығы ордендары кавалеры **Зәкәриә Аҡназаровтың тыуыуына - 100 йыл** (1924-2000).

**30 -** ғалим-психолог, юғары мәктәп уҡытыусыһы, психология фәндәре кандидаты, Өфө фән һәм технологиялар университетының психология факультеты деканы, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре **Светлана Ғәләүетдиноваға - 75 йәш** (1949).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Сығарылыш уҡыусыларының юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеү этабы тамамлана. Улар күберәк ниндәй һөнәрҙәргә өҫтөнлөк бирә икән, шул турала бер кәлимә әйтһәгеҙсе?***



***Илдар ХӘМИТОВ, ӨФТУ-ның Сибай институты директоры:*** Быйыл Сибай институтының тәбиғи-техник, педагогия, технология факультеттарына уҡырға инергә теләүселәр күп булды. Тағы ла йәштәр араһында педагогия йүнәлешенә иғтибар артыуын билдәләр инем, сөнки элекке йылға һәм былтырғыға ҡарағанда быйыл уҡытыусы һөнәрен үҙләштерергә теләүселәр һаны байтаҡҡа күп. Был да ҡыуаныслы күренеш, тимәк, бер нисә йылдан мәктәптәргә башҡорт телен белгән үҙебеҙҙең педагогтар эшкә киләсәк. Был институт хеҙмәткәрҙәренең һөнәр һайлау буйынса ойоштороған эшмәкәрлеге, районбарҙағы белем усаҡтарында уҡыусылар менән осрашыуҙар, социаль селтәрҙәрҙә һәм рәсми сайт аша мәғлүмәтте ваҡытында еткереп тороуҙың да һынғай һөҙөмтәһе, тип билдәләр инем.

Әйтергә кәрәк, беҙҙең институттың һәр уҡытыу йүнәлешендә 18-20 бюджет урыны ҡаралған, ситтән тороп уҡырға теләүселәрҙең дә бындай мөмкинлеге бар. Тик һуңғы йылдарҙа иҡтисад менән хоҡуҡ факультеттарында ғына уҡыу түләүле, шулай ҙа республиканың башҡа юғары уҡыу йорттары менән сағыштырғанда беҙҙә хаҡтар бик юғары түгел. Дөйөм алғанда быйыл беҙҙең уҡыу йортонда 213 бюджет урыны иҫәпләнә, был былтырғыға ҡарағанда 18 урынға күберәк. Бюджет урынына инеү өсөн абитуриенттың БДИ һөҙөмтәләре талап ителгән предметтарҙан дөйөм 170-175 балл тәшкил итергә тейеш. Шулай уҡ Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡандар һәм уларҙың балалары айырым квота буйынса конкурсһыҙ уҡырға инә ала, инвалид һәм етем балаларға ла шундай махсус квота ҡаралған. Иң мөһиме, бөтә студенттарыбыҙға ла ятаҡтан урын бүленә, хатта түләүле бүлектә уҡығандарға ла йәшәргә урын эҙләп ҡайғырырһы түгел. Был да үҙенә күрә зур өҫтөнлөк.

Сибай институты - Урал аръяғы райондарына йүнәлеш тотоп асылған юғары уҡыу йорто, шуға беҙгә күберәк Сибай ҡалаһы, Баймаҡ, Хәйбулла, Әбйәлил, Йылайыр райондарынан, һуңғы йылдарҙа Силәбе өлкәһенән йәштәр уҡырға килә. Шулай уҡ Ейәнсура районынан да студенттар ҡабул итәбеҙ, Ырымбур өлкәһенән дә барҙар. Хатта быйыл Үзбәкстандан - ике, Тажикстан һәм Ҡырғыҙстандан берәр абитуриент документын тапшырҙы. Сибай институтын тамамлаған белгестәр һәр ерҙә лә эш урыны таба ала, бик юғары баһалана, араларында вазифалы урындарҙа эшләүселәр бик күп. Өфө фән һәм технологиялар университеты филиалы булараҡ, киләсәктә беҙҙең мөмкинлектәр тағы ла артыр, яңы уҡытыу йүнәлештәре асылыр, тигән өмөтөбөҙ бар. Бына киләһе уҡыу йылында уҡытыусылыҡ, хоҡуҡ, иҡтисад, биология, экология, техник һөнәрҙәргә магистратурала белемде камиллаштырыу мөмкинлеге асыласаҡ. Быға тиклем беҙҙә магистратура юҡ ине. Шулай уҡ яҡын киләсәктә IT-һөнәрҙәргә, пилотһыҙ осоу аппарттары, мәғлүмәт хәүефһеҙлеге буйынса заман талабына яуап биргән белгестәр әҙерләй башлау ниәте лә бар.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# О, СПОРТ, СӘЙӘСӘТ ҠОРБАНЫ!



**Донъя күләмендәге ваҡиғаларҙың үткән аҙна йомғаҡтарына ҡыҫҡаса байҡау ҙа шуны күрһәтә: халыҡ-ара сәйәси-иҡтисади өлкәлә бер аҙға ғына булһа ла тотороҡлолоҡ, айыҡ аҡыл өҫтөнлөгө һәм именлеккә ҡарай бәләкәй генә ишара ла юҡ; бөтөн донъя әллә аҡылын юйҙы, әллә кемдер иләүгә таяҡ тыҡҡандай, бутай ҙа бутай донъяны...**

Етмәһә, шул буталыш шойконолай, 19 июлдә донъя кимәлендә Microsoft программаһы глобаль тоҡтарлыҡҡа дусар ителде. Ул вирусҡа ҡаршы CrowdStrike программаһын яңыртыу менән бәйле булған. Шул арҡала күп кенә илдәрҙең авиакомпаниялары, дауаханалар, банктар һәм киң мәғлүмәт саралары эшендә проблемалар килеп тыуған. Ләкин был буталыуҙар Рәсәйгә ҡағылманы, тип хәбәр итә мәғлүмәт хәүефһеҙлеге эксперты А. Лукацкий, сөнки Microsoft санкциялар арҡаһында Рәсәй клиенттарының күпселеген Azure системаһынан сығарғайны.

Уның ҡарауы, АҠШ-та Рәсәй менән мөнәсәбәттәр өлкәһендә билдәле бер роль уйнаясаҡ президентты һайлау алды ығы-зығыһы тәрләсә тәҫкә инеп, берсә ыңғайға өмөтләндерә бирһә лә, берсә хәүефләндерә. Дөрөҫ, ике ил араһы яңы президент килеү менән генә яҡшырып та китмәҫ, сөнки президентлыҡ "дилбегәһе" - агрессив хәлокло НАТО ҡулында. **Әлеге ваҡытта Джо Байден оҙаҡ икеләнеүҙәрҙән һуң киләһе срокка президентлыҡҡа һайланыуға көрәштән баш тартып, урынбаҫары - вице-президент Камала Харрис кандидатураһын хупланы. Кандидатураһын раҫлатыу өсөн уға делегаттарҙың 1976 тауышы кәрәк булһа, 2538 делегат Харрис өсөн тауыш бирергә әҙер булыуын белдерҙе. Әле Президентлыҡҡа дәғүәселәр араһында АҠШ-тың элекке президенты Барак Обаманың ҡатыны Мишель Обама, бер нисә штат губернаторы, шулай уҡ Роберт кесе Кеннеди һәм элекке дәүләт секретары Хиллари Клинтон да бар.**

АҠШ-та президент һайлауҙары алдынан барған ығы-зығы һәм буталышлыҡтың шул сигенә килеп етте: 26 июлдә Парижда башланасаҡ Олимпиадаға оҙаҡ бәхәстәрҙән һуң 5 спорт төрөндә ни бары 15 рәсәйле-спортсыға "нейтраль статуста" ҡатнашырға рөхсәт ителде һәм шундай шарт менән: был уйындарҙа Рәсәй флагы ла елберҙәмәйәсәк, гимны ла яңғырамаясаҡ, сөнки уларға Олимпиаданы асыу тантанаһында ҡатнашыу тыйыла. Был беҙҙең спортсылар йөҙөндә тотош илде мыҫҡыллауҙың һуңғы сиге түгелме? Хәйер, спортта беҙҙең илгә ҡарата бындай асыҡтан-асыҡ дошманлыҡ сәйәсәте яңылыҡ түгел, ләкин Олимпиада - ул бит сәйәсәткә ҡатнашы булмаған иркеле спорт уйындары тип юҡҡа аталмағайны.

Ә Париж нисек әҙерләнә Уйындар үткәреүгә? Әйткәндәй, Францияның сәйәси, социаль мәсьәләләр менән бергә был йәһәттән дә проблемалары баштан ашҡан. Уйынлы-ысынлы әйтеүҙәренсә, Парижға бөгөн барған да үкенер, бармаған да үкенер. Июнь айында ғына Париждың үҙәк артерияһы булған Сена йылғаһына 50 млн литр канализация ҡалдығы ағып төшөүгә ҡарамаҫтан, ҡала властары һыу таҙа тип ышандырырға тырыша. Франция президенты Макрон үҙе лә хатта Сенаға төшөп һыу инергә һүҙ бирҙән, имеш, тик вәғәҙә һаман үтәлмәгән. Рапорт бирергә яратыусы ҡала менеджерҙары шулай уҡ Парижды баҫып алған ҡандала, бөрсә кеүек ҡан эскес бөжәктәрҙе, сысҡан һәм ҡомаҡтарҙы ла юҡ итеүҙәре, ҡасаҡтарҙы, бомждарҙы, мигранттарҙы ҡала ситенә ҡыуып сығарыуҙары хаҡында рапорт әҙерләй, тиҙәр...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Рәсәй Президенты Владимир Путин указы менән Валерий Кузьмин Луганск Халыҡ Республикаһы прокурорының беренсе урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Валерий Кузьмин 2002 йылда Башҡорт дәүләт университеты дипломын алған. Шул уҡ йылда Башҡортостандың Бишбүләк районы прокуроры ярҙамсыһы булып эш башлай. Луганск Халыҡ Республикаһында яңы вазифаға тәғәйенләнгәнсе, 2021 йылдан 2024 йылға тиклем, Түбәнге Новгород өлкәһе прокурорының беренсе урынбаҫары була.

✔Асҡын районы эшҡыуары, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән ойошторолған "Атайсал" проектында әүҙем ҡатнашыусы, тимерсе Эдуард Тимерғәлин махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар өсөн гуманитар йөк әҙерләй. Уның ағаһы ла махсус хәрби операция биләмәһендә. Активист уға биш ишекле "Нива" һәм запас тәғәрмәстәр, ә Асҡын ауылы халҡы автомобилгә запас частар, иретеп йәбештереү кәрәк-ярағы, газ баллондары һәм плиткалар, госпиталь өсөн әйберҙәр һәм дарыуҙар ебәрергә йыйына.

✔Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура министрлығы 2024 йылдың өсөнсө кварталына бер квадрат метр торлаҡтың уртаса баҙар хаҡын раҫланы - 113 262 һум. Бер "квадрат" торлаҡтың уртаса баҙар хаҡы республикала даими йәшәгән һәм торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж граждандарға бүленгән субсидияларҙы иҫәпләү өсөн кәрәк. Торлаҡты һатып алыу йәки төҙөү өсөн аҡса федераль һәм республика бюджетынан бүленә.

✔Башҡортостанда йәш ауыл уҡытыусылары өсөн гранттарға ғаризалар ҡабул итеү тамамланды. Мәғариф министрлығында хәбәр итеүҙәренсә, рейтингта республика райондарынан бөтәһе 179 йәш уҡытыусы булған. Конкурс йомғаҡтары буйынса иң яҡшы 150 ауыл уҡытыусыһына һәр береһе 690 мең һумлыҡ гранттар тапшырыла. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, йәш ауыл уҡытыусыларына гранттар 2019 йылда булдырылды. Былтыр 150 уҡытыусы 690-шар мең һум аҡса алды. 2020 йылдан республикала "Ауыл уҡытыусыһы" федераль программаһы эшләп килә. Уның ярҙамында 150 уҡытыусының һәр береһенә 1 миллион һум тапшырылды.

ҠЫҪҠАСА

# УРАҠҠА ТӨШТӨЛӘР

**Башҡортостанда ураҡ кампанияһы башланды, яңы уңыштың тәүге мең тоннаһы йыйып алынған да инде. "Беҙ республиканың көнбайыш райондарынан башланыҡ, көньякта һәм Урал аръяғында әлегә ямғыр яуа. Ғөмүмән, йыл бик үҙенсәлекле, климат шарттары ҡатмарлы", - тип белдерҙе республика Башлығы Радий Хәбиров.** Мәғлүмәттәр буйынса, республикала 6,6 мең гектар ужым иген культуралары сабылған. Ашлыҡтың тулайым йыйымы 21,7 мең тоннаға еткән. "Әле ужым бойҙайы 5,3 мең гектарҙа урылған, 18, 8 мең тонна ашлыҡ һуғылған", - тип белдерҙеләр Ауыл хужалығы министрлығында. Башҡортостан аграрийҙары ужым арышы, шипкән, тритикале һәм башҡа культуралар йыя башлаған. Ауырғазы районы игенселәре барыһынан да әүҙемерәк эшләй. Был районда хәҙерге ваҡытта 4,9 мең тонна яңы уңыш ашлығы йыйып алынған. Бөгөнгә республикала ужым ашлығының уртаса уңышы гектарынан 35,2 центнер тәшкил итә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2024 йылда Башҡортостанда ужым иген культураларының дөйөм майҙаны - 390 мең гектарҙан ашыу, был иһә былтырғыға ҡарағанда 31 процентҡа күберәк.

✓**Башҡортостандан Асҡар Ишбирҙин һәм Рушан Хәсәнов V Бөтә донъя күсмә халыҡтар уйындарында ҡатнашыу өсөн Рәсәй йыйылма командаһына инде.** Спортсылар "һыбай килеш уҡтан атыу" дисциплинаһында сығыш яһай. Был хаҡта республиканың Спорт министрлығынан хәбәр иттеләр. 2024 йылда Күсмә халыҡтар уйындарында ҡатнашыу өсөн һайлап алыу ярыштары Ҡалмыҡстанда уҙҙы. Асҡар Ишбирҙин ҡабаҡ төрөк уҡ атыу төрөндә - өсөнсө, Рушан Хәсәнов иһә венгр төрөндә икенсе һәм Корея төрөндә өсөнсө урынды алды. Спорт министрлығында белдереүҙәренсә, ҡаҙаҡ стиле - жамбы пьедесталын Башҡортостан спортсылары: Асҡар Ишбирҙин, Рушан Хәсәнов һәм Айнур Низаметдинов яуланы. Күсмә халыҡтар уйындары быйыл 8-14 сентябрҙә Астанала ойоштороласаҡ. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, ярыштарҙа донъяның 100-ҙән ашыу иленән 4 меңгә яҡын кеше ҡатнаша.

✓**Башҡортостан Хөкүмәте контракт буйынса хеҙмәт иткән айырым категорияларға бер тапҡыр аҡса түләү тәртибенә үҙгәрештәр индерҙе.** Һүҙ Махсус хәрби операция биләмәһендә хеҙмәт итеү өсөн илдең оборона министрлығы менән килешеү төҙөгән яҡташтарыбыҙға 505 мең һум күләмендә бер тапҡыр түләү тураһында бара. Ҡарар 2024 йылдың 10 июленән 2024 йылдың 31 августына тиклем барлыҡҡа килгән хоҡуҡи мөнәсәбәттәргә ҡағыла. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса 10 июлдән контракт буйынса хеҙмәт итеү өсөн килешеү төҙөгән граждандарға түләү күләме артты. Әгәр быға тиклем бер тапҡыр бирелә торған түләү күләме 205 мең һум тәшкил итһә, хәҙер ул республика ҡаҙнаһы иҫәбенә арттырылды һәм 505 мең һумға еткерелде.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАҺАЛАНЫ ҺӘМ ҠӘНӘҒӘТ ҠАЛДЫ



**Башҡортостанда эш сәфәре менән Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе урынбаҫары Марат Хөснуллин булып китте. Ул Өфө ҡәлғәһенең 450 йыллығы айҡанлы асырға планлаштырылған бер нисә объектта булды.**

Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе урынбаҫары менән Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың эшлекле осрашыуы ваҡытында федераль үҙәк менән республиканың үҙ-ара хеҙмәттәшлеге мәсьәләләре һәм төбәк биләмәһендә күләмле проекттарға өҫтәмә ярҙам саралары тикшерелде. Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе урынбаҫары Марат Хөснуллин Башҡортостандың төҙөлөш комплексы эшен юғары баһаланы. "Бөгөн Өфө урамдары буйлап үткәндә күргәндәрем бик ыңғай тәьҫораттар ҡалдырҙы. Ҡалала йорттарҙың архитектураһы матур, улар шул иҫәптән биләмәләрҙең комплекслы төҙөлөшө сиктәрендә һалына. Республика баш ҡалаһының яңы заманса стиле формалашыуы ҡыуаныслы. Торлаҡ төҙөлөшө күләмдәре буйынса Башҡортостан алдынғы ун төбәк иҫәбенә инә. Был темп йылдан-йыл арта. Юл инфраструктураһын үҫтереү буйынса төбәк "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" милли проекты пландарын уңышлы үтәй. Дөйөм алғанда, Башҡортостан субъекттарға федераль ярҙам сараларын һөҙөмтәле тормошҡа ашыра. Ҡайҙалыр хатта алдараҡ та бара. Был идара итеү командаһының һәм системалы эше тураһында һөйләй. Шуға күрә Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡуйған стратегик бурыстарҙы тормошҡа ашырыу йүнәлешендә республика менән эҙмә-эҙлекле хеҙмәттәшлекте дауам итәсәкбеҙ. Яңы бурысыбыҙ - "Тормош өсөн инфраструктура" милли проекты", - тине Марат Хөснуллин.

Көн тәртибе сиктәрендә осрашыуҙа ғәмәлдәге "Торлаҡ", "Юлдар" проекттарын, шулай уҡ коммуналь инфраструктураны яңыртыу һәм авария хәлендәге, иҫке йорттарҙан күсереү программаларын берләштерергә тейешле "Тормош өсөн инфраструктура" милли проектын булдырыу мәсьәләләре тикшерелде.

# ХАЛЫҠ МЕНӘН АРАЛАШЫРҒА!



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Шишмә районында, Рәсәй Геройы Максим Серафимов исемендәге "Патриот" хәрби-патриотик паркта ауыл биләмәләре башлыҡтарының быйылғы, өсөнсө тапҡыр үткәрелгән семинарында Әбйәлил, Архангел, Ауырғазы, Бәләбәй, Бишбүләк, Дүртөйлө, Ейәнсура, Ишембай, Ҡалтасы, Ҡариҙел, Ҡыйғы, Краснокама, Кушнаренко, Тәтешле, Шаран райондары вәкилдәре менән осрашты.**

Былтыр 9 төбәк семинарҙары үткәрелде, уларҙың йомғаҡтары буйынса 68 күрһәтмә бирелде, шуларҙың күбеһе тормошҡа ашырылды, тип билдәләне республика Башлығы. Быйыл осрашыу форматын үҙгәртергә һәм ике көнлөк семинарҙар циклын "Патриот" паркында уҙғарырға ҡарар ителде. "Миненсә, ошо хәрби-патриотик үҙәкте килеп күреү һеҙҙең өсөн ҡыҙыҡлы булғандыр. Бер йылда бында тотош республиканан 10 меңдән ашыу мәктәп уҡыусыһы хәрби-күнекмә йыйындарында ҡатнашты. Ошондай үҙәктәр селтәрен үҫтерергә ҡарар иттек. "Патриот"тың беренсе филиалын Стәрлебаш районында асабыҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Республика Башлығы әйтеүенсә, бөгөн төп бурыс - Махсус хәрби операцияға булышлыҡ итеү. Тәү сиратта, был яугирҙарыбыҙға, шулай уҡ уларҙың ғаиләләренә ярҙам күрһәтеүгә ҡағыла. Радий Хәбиров билдәләүенсә, икенсе мөһим бурыс - урындарҙа тотороҡло социаль-иҡтисади хәл. "Әлбиттә, республикала муниципалитеттар көслө, күп эштәр башҡарыла, әммә халыҡ һәр саҡ күберәкте көтә. Беҙгә артабан да урындағы иҡтисадты нығытырға, бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа ярҙам итергә, инвесторҙар менән эшләргә кәрәк", - тине Башҡортостан Башлығы. Уның әйтеүенсә, ауыл биләмәләре етәкселәренә район башлыҡтары менән бергә туризм тармағына айырым иғтибар бүлеү талап ителә. Күп райондарҙың үҙенсәлекле урындары, тәбиғи, тарихи һәм мәҙәни ҡомартҡылары бар. Башҡортостанда ваҡиғалар туризмы әүҙем үҫешә. Хәҙер күп ҡала һәм райондарҙа брендҡа әүерелгән, меңәрләгән ҡатнашыусыны йәлеп иткән традицион саралар бара.

Радий Хәбиров ауыл биләмәләре башлыҡтарының ижтимағи-сәйәси эшкә лә ҙур иғтибар бүлергә тейешлеген билдәләне. "Иң мөһиме, халыҡ менән даими аралашыу, һорауҙарға түҙемле яуап биреү һәм буш вәғәҙәләр бирмәү, - тине ул. - Ғөмүмән, халыҡ төрлө алдаҡ схемаларға ышанмаһын өсөн ауыл биләмәләре башлыҡтары улар менән даими эш алып барырға тейеш".

# ХӘЙБУЛЛАЛА...



**Хәйбулла районында ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу мәсьәләләре буйынса республика ведомство-ара комиссияһы эше барышында Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһенең эске сәйәсәт буйынса беренсе урынбаҫары Азат Бадранов урындағы халыҡты борсоған мәсьәләләрҙе асыҡлау, проблемаларҙы хәл итеү юлдарын билдәләү өсөн осрашыу үткәрҙе.**

Осрашыуҙы асып, Азат Бадранов Хәйбулла районының тау-мәғдән сәнәғәте иҫәбенә лә әүҙем үҫешеүен билдәләне. Уҙған йыл йомғаҡтары буйынса муниципалитет урындағы бюджетты тулыландырыу йүнәлешендә беренсе урын алды - яҡынса 500 миллион һум. "Республика етәкселегенең бурысы - законды һәм экологик нормаларҙы үтәү күҙлегенән баланс тәьмин итеү, эш урындары булдырған, һалым түләгән, яңы проекттарға инвестиция һалған бизнесҡа эшләргә һәм үҫешергә мөмкинлек биреү. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров район буйлап эш сәфәрҙәре барышында ошо турала күп тапҡыр әйткәне бар", - тине Азат Шамил улы.

Хәйбулла районы хакимиәте башлығы Рөстәм Шәрипов һүҙҙәренсә, Аҡъярҙа ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу мәсьәләләре буйынса ведомство-ара комиссияһының һуңғы ултырышынан һуң бер айҙан күберәк ваҡыт үтеп киткән, әммә ошо арала байтаҡ эш башҡарылған. "Тәү сиратта был беҙҙең юлдар менән бәйле. Уҙған ултырыштан һуң Аҡъяр - Сибай юлын төҙөкләндереү, Яңы Ерген күперен йүнәтеү эштәре башланды. Шул саҡта уҡ тау-мәғдән предприятиелары ташыусылары менән юл эшмәкәрлеге талаптарын үтәү буйынса осрашыу үткәрергә ҡарар ителде", - тине район етәксеһе.

Осрашыуҙа юлдарҙы ремонтлау, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләренә ярҙам күрһәтеү, йәштәрҙең ситкә китеүе, ФАП-тар һәм дарыуханалар асыу кеүек халыҡты борсоған һорауҙар яңғыраны. Шуларҙың береһе - Аҡъярҙа яңы Мәҙәниәт йорто һалыу. Мәҙәниәт йорто сиҙемде үҙләштереү осоронда уҡ төҙөлгән. Шул ваҡыттан алып ул техник яҡтан иҫкергән, өҫтәүенә ошондай ҙур район өсөн бик бәләкәй. Урындағы халыҡ шулай уҡ Аҡъяр - Өфө маршруты өсөн уңайлы автобус бүлеүҙе һораны.

Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Шаҡша күперендә тиҙлек сәғәтенә 20 саҡрымға тиклем сикләнә. Был турала үҙенең телеграм-каналында Өфөнөң Калинин районы башлығы Ғәзизйән Әхмәтйәнов хәбәр итә. "Һис шикһеҙ, был көндәрҙә беҙҙең өсөн төп объект - Шаҡша күпере. Күперҙең уң яғында ике ҡат асфальт түшәлгән, юл ҡоймалары ҡуйыла. Күперҙең бер өлөшөн 24 июлдә транспорт хәрәкәте өсөн астыҡ. Тиҙлек сәғәтенә 20 саҡрымға тиклем сикләнә", - тип билдәләне район башлығы. Уның һүҙҙәренсә, Шаҡша күперен йәнә ике тапҡыр ябыу планлаштырыла.

✓1 июлдә льготалы ипотека программаһы тамамланыр алдынан Башҡортостанда йәшәүселәр дәүләт ярҙамынан файҙаланып ҡалырға тырышты, тиелә Берләшкән кредит бюроһы мәғлүмәттәрендә. Июнь йомғаҡтары буйынса Башҡортостан ипотека кредитлауының максималь күләме буйынса тәүге 5 төбәк иҫәбенә инде. Июнда республикабыҙ халҡы 30,79 миллиард һумға 7,09 мең ипотека килешеүе төҙөгән. Хәҙер ипотека ставкаһы - 20 процент, ә һатып алыусылар икенсел баҙарға иғтибарын йүнәлтә.

✓Башҡортостанда 31 июлгә тиклем "Такси" рейдтары башланды. Полиция Дәүләт автоинспекцияһы, иҡтисади хәүефһеҙлек һәм миграция мәсьәләләре буйынса бүлектәре, шулай уҡ республиканың Транспорт һәм юл хужалығы министрлығы менән берлектә күләмле саралар үткәрә. Быйыл ярты йыл эсендә республикабыҙҙа еңел таксиҙар ҡатнашлығында 28 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, уларҙа ике кешенең ғүмере өҙөлгән, 38-е йәрәхәтләнгән.

✓20 июлдән Smartavia авиакомпанияһының Өфө аэропортынан Пулково аэропортына өҫтәмә рейстары асылды. Санкт-Петербургҡа шишәмбе һәм шәмбе көндәрендә Boeing 737-800 самолеттарында осорға мөмкин. Өфөнән Рәсәйҙең төньяҡ баш ҡалаһына рейстар - иң популяр 3 йүнәлеш иҫәбендә. Баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, тура даими рейстарҙы "Россия", Smartavia, Nordwind Airlines авиакомпаниялары башҡара. Ҡалалар араһында осоштарҙың дөйөм һаны аҙнаһына 36-ға етә.

"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

✓ *Ил Президенты Владимир Путин ҡарары буйынса XII "Рәсәй - спорт держаfavaһы" халыҡ-ара форумы Өфөлә үтә. Төп саралар 2024 йылдың октябрендә Көрәш һарайында ойоштороласаҡ.*



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# ҘУР САРА КӨТӨЛӘ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров видеоконференция режимында "Рәсәй - спорт державаһы" халыҡ-ара форумына әҙерлек буйынса федераль ойоштороу комитетының беренсе ултырышында ҡатнашты. Уны Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Урынбаҫары Дмитрий Чернышенко үткәрҙе.**




Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ: ил Президенты Владимир Путин ҡарары буйынса XII "Рәсәй - спорт державаһы" халыҡ-ара форумы Өфөлә үтә. Төп саралар 2024 йылдың октябрендә Көрәш һарайында ойоштороласаҡ.

Кәңәшмә башында Дмитрий Чернышенко форумдың ил биләмәһендә иң ҙур халыҡ-ара спорт ваҡиғаларының береһе булыуын билдәләне. Вице-премьер ойоштороу комитетына форум сиктәрендә үтәсәк Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Физик культура һәм спорт буйынса совет ултырышына әҙерлеккә айырыуса иғтибар бүлергә ҡушты. "Ил Президенты Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһендә спорт өлкәһен камиллаштырыу буйынса күрһәтмәләр бирҙе - йыл һайын төбәктәрҙә, тәү сиратта бәләкәй ҡалаларҙа һәм ауыл биләмәләрендә, өҫтәмә рәүештә кәмендә 350 спорт объекты төҙөргә. Хәҙер Спорт министрлығы уларҙы финанслау тәртибе буйынса тәҡдимдәр әҙерләй, - тине Дмитрий Чернышенко. - Беҙҙең алда шулай уҡ Махсус хәрби операция яугирҙарын йәмғиәткә ылыҡтырыу һәм унда үҙ урындарын табыу өсөн шарттар булдырыу бурысы тора. "Геройҙар дәүере" программаһында ҡатнашыусылар бындай ҡарарҙарға булышлыҡ итә ала".

Рәсәйҙең спорт министры Михаил Дегтярёв форум эшенең төп йүнәлештәре тураһында һөйләне. Уның абруйлы ҡунаҡтары иҫәбендә төбәк башлыҡтары, федераль ведомстволар һәм спорт ойошмалары етәкселәре, спорт индустрияһы лидерҙары һәм ветерандары буласаҡ. Бынан тыш, БРИКС, БДБ һәм Азияның Олимпия советына ингән башҡа илдәр вәкилдәрен саҡырырға ниәтләйҙәр. Ҡатнашыусыларҙың дөйөм һаны 5 меңдән артыр, тип көтөлә.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала форумға спорт инфраструктураһын әҙерләй башлауҙары хаҡында хәбәр итте: "Башҡортостан илдең алдынғы спорт төбәктәренең береһе булараҡ күп йылдар дауамында ҙур ярыштарҙы уңышлы үткәрә. Үҫмерҙәр араһында спорт көрәше буйынса донъя беренселеге, Сурдлимпиясыларҙың йәйге уйындары һәм "Евразиадаға ҡаршы" милли һәм олимпия уйындарына ҡарамаған спорт төрҙәренең беренсе халыҡ-ара уйындары республикабыҙ ҡабул иткән сағыу ваҡиғалар булды, - тип билдәләне төбәк етәксеһе. - Әле илдең төп спорт ваҡиғаһы булған "Рәсәй - спорт державаһы" форумына әүҙем әҙерләнәбеҙ. Эште тейешле "юл картаһы" сиктәрендә алып барабыҙ. Сараның төп майҙансығы - Көрәш һарайы, ул 31 августа Өфөлә асыла. Форумда ҡатнашыусылар өсөн бай ял программаһы ла тәҡдим итәбеҙ. Башҡортостандың күп милләтле мәҙәниәте, йолалары һәм тарихы менән таныштырасаҡбыҙ".

# САЛАУАТ ПРОСПЕКТЫНАН...

**Рәсәйҙең Баш дәүләт экспертизаһы Өфөлә Салауат Юлаев проспектының дауамын төҙөү буйынса проект-смета документацияһын ҡараны. Экспертиза һөҙөмтәләре буйынса ыңғай ҡарар ҡабул ителде. Ошо хаҡта "Дәүләт экспертизаһы буйынса баш идаралыҡ" федераль автономиялы учреждениеһының матбуғат хеҙмәте хәбәр итте.**

Эштәр 127,9 га майҙанда, баш ҡалабыҙҙың Октябрь һәм Орджоникидзе райондарында, Баязит Бикбай урамынан Интернациональ урамға тиклемге участкала башҡарыласаҡ. "Өфөнөң иң популяр магистрале район һәм федераль юлдарҙы ғына түгел, Черниковка биҫтәһен ҡаланың башҡа өлөштәре менән тоташтырасаҡ. Шулай итеп, Өфө халҡы өсөн тағы ла бер альтернатив маршрут асылып, йәнәш ятҡан урамдарҙы бушатасаҡ һәм транспорт менән ҡуллана алыуҙы яҡшыртасаҡ", - тип белдерҙе Баш дәүләт экспертизаһы вәкиле, проекттың баш эксперты Сергей Домницкий.

Объектты төҙөү өс этаптан торасаҡ, тип күҙаллана. Беренсе этапта 1,4 км оҙонлоғонда юл һәм Ватутин урамына төрлө кимәлле транспорт сиселеше, икенсеһендә - тағы ла 1,3 км оҙонлоғондағы юл һәм Өфө шоссеһы менән юл сиселеше, өсөнсөһөндә - Трамвай һәм Интернациональ урамдары менән киҫелештәрҙәге сиселештәре менән 12,9 саҡрымлыҡ юл һалынасаҡ. Унан башҡа, проект сиктәрендә юл буйы ҡоймаларын төҙөү, юлдарға билдәләр яһау, юл буйы билдәләрен һәм светофорҙар ҡуйыу, күреү буйынса инвалидтар өсөн тактиль күрһәткестәр һалыу эштәре башҡарыласаҡ. Белгестәргә ҡала транспортының һәм йәйәүлеләрҙең интенсив хәрәкәте, биналарҙың һәм һаҡланып ҡалдырылырға тейешле ағас-ҡыуаҡтарҙың төҙөлөш майҙансыҡтарына яҡын урынлашыуы уңайһыҙлыҡ тыуҙыра, тип мәғлүмәт бирҙе Рәсәйҙең Баш дәүләт экспертизаһы. Объектты проектлаусы ойошма - ААЙ "Институт Гипростроймост", төҙөүсеһе - Өфө хакимиәтенең Юлдар һәм яһалма ҡоролмаларҙы төҙөү һәм ремонтлау буйынса идаралығы.

# БҮЛЕШЕҮ МӨҺИМ

**Өфөлә "Русь" аҙыҡ-түлек банкының Башҡортостан бүлеү үҙәген асыу тантанаһы үтте. "Бүлешеү мөһим" социаль проекты фудшеринг булып тора. Ул махсус ойошмалар йәки онлайн-платформалар ярҙамында ҡулланыу ваҡыты үткән (тамамланмаған!) аҙыҡ-түлекте мохтаждарға бүлеп биреүҙе аңлата.**

Үҙәктең төп офисы Зорге урамы, 5 адресы буйынса урынлашҡан. Бында килтерелгән аҙыҡ-түлекте ирекмәндәр мохтаждар өсөн әҙерләй. 2024 йылдың июнендә Һаҡлыҡ банкының Башҡортостан бүлексәһе бүлеү үҙәге, келәт һәм административ пункт өсөн бина бирә. Бинаның дөйөм майҙаны 526 квадрат метр тәшкил итә. Был локация нөктәһе ҡаланың төп магистралдәренең береһендә урынлашҡан, транспорт логистикаһы һәм уңайлы инфраструктураһы бар. Фудшерингты асыу тантанаһында дөйөм туҡланыу предприятиелары һәм төбәк ритейлерҙары вәкилдәре ҡатнашты. "Русь" аҙыҡ-түлек банкы хәйриә фонды президенты Юлия Назарова проекттың ни өсөн булдырылыуын һәм уның кешеләргә нисек файҙалы буласағын аңлатты: "Белеүегеҙсә, илдә 13 миллион кеше ярлылыҡ сигендә йәшәй, шул уҡ ваҡытта 17 миллион тонна самаһы аҙыҡ-түлек утилләштерелә, был һан күпкә күберәк. Был күләмдең ниндәйҙер процентын ваҡытында, йәғни яраҡлылыҡ осоронда, мохтаж кешеләргә тапшырырға мөмкин. Беҙ мохтаждарҙың күпселеген ашатыу бурысын ҡуйҙыҡ. Беҙгә аҙыҡ-түлек банкылары һәм фудшеринг ойошмалары селтәрен үҫтерергә кәрәк, хәйриә менән шөғөлләнеүселәр, кәрәкле инфраструктураға эйә булыусылар, аҙыҡ-түлек ярҙамының нимә икәнен, ниндәй үҙенсәлек барлығын аңлаған хеҙмәткәрҙәр уны һөнәри кимәлдә эшләй".

Республика Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Урал Килсенбаев әйтеүенсә, быға тиклем дә Башҡортостанда мохтаждарға ошондай ярҙам күрһәтелде, әммә ул даими булманы. Хәҙер системалы ярҙам күрһәтергә мөмкин. "Ярҙам аҙыҡ-түлеккә мохтаж кешеләр өсөн. Бында һәр кемдең, аҙыҡ-түлек йыйылмаларын формалаштырған, йыйған ирекмәндәрҙең хеҙмәте бик мөһим. Был ярҙам - йәмғиәтебеҙҙең өлгөргәнлеге, ковид ваҡытында башланған изге эшебеҙҙе дауам итеү, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Урал Килсенбаев. - 2022 йылдың декабрендә Баймаҡ районының Төрөкмән ауылында тотош ауыл тиерлек һыйырын юҡ итергә мәжбүр булды, ә мал ауылда йәшәгән ғаиләләрҙә - йәшәү сығанағы. Шул саҡта "Русь" аҙыҡ-түлек банкы ярҙамға килде һәм ғаиләләр Яңы йылды тулы һыуытҡыс менән ҡаршыланы".

Әйткәндәй, "Русь" - Рәсәйҙә иң ҙур аҙыҡ-түлек банкы һәм беренсе фудшеринг ойошмаһы. 2023 йылдың 5 декабрендә Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте менән "Русь" аҙыҡ-түлек банкы" хәйриә фонды араһында стратегик партнерлыҡ тураһында меморандумға ҡул ҡуйылды, шунда уҡ төбәк "Аҙыҡ-түлек" операторы булдырылды. Фондтың республикалағы төп эш йүнәлеше аҙыҡ-түлек банкының бүлеү үҙәген, ирекмәндәр һәм төбәк командаһы өсөн штаб-фатирын ойоштороу. Аҙыҡ-түлек йыйылмаһына сәй, шәкәр, һөт, ҡарабойҙай, тушенка, көнбағыш майы һәм башҡа кәрәк-яраҡ продукттары инә.

**“Башинформ”дан.**

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Алма

❖ Аҙҡанлылыҡ булғанда 1 ҡалаҡ алма япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм бал ҡушып, көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң 1-әр стакан эсергә.

❖ Невралгиянан 1 балғалаҡ алма һеркәһен 1 стакан һыуға ҡушып сәғәт һайын аҙ ғына уртлап бөтөргәнсе эсергә.

❖ Нефрит булғанда көн һайын 2 яңы йәки мейестә бешерелгән алма ашарға.

❖ Йөрәккә бәйле барлыҡҡа килгән шешенеүҙән ваҡыты-ваҡыты менән ашауҙы кәметеү көндәре үткәрергә кәрәк: тәүлек эсендә 600-800 грамм алма һәм 300-400 грамм эремсек ашарға. Ныҡ шешенгәндә бындай диетаны биш көн үтәргә ҡушалар.

❖ Һимеҙлектән яфаланғанда 1 стакан һыуға 2 балғалаҡ алма һеркәһен ҡушып, ашаған һайын эсергә. Был рәүешле 1 йыл дауаланырға. Шулай уҡ алма диетаһын тотоп алырға була: көнөнә 1,5 кг алма ашарға, был көндә башҡа ризыҡ ҡапмаҫҡа. Туҡланыу бүленгән булырға тейеш: 5 тапҡыр 300-әр грамм алма. Алмаларҙың татлы булмаған сортын ҡулланырға, ҡабығын ашарға, әммә үҙәген ташларға. Тағы ла ябығыу өсөн башҡа төр шыйыҡлыҡтарҙан баш тартып, алма һутын ғына эсеп йөрөргә лә була, тиҙәр. Әммә үҙең яңы әҙерләгән һутты ҡулланырға, һатып алынғаны файҙаһыҙ.

### Лимон

❖ Шәкәр диабетынан 2 ҡалаҡ ҡырылған лимон ҡабығына 2 стакан һыу ҡойоп, ауыҙы ябыҡ һауытта 30 минут ҡайнатырға, 10 минут төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1/2 стакан эсергә.

❖ Ашағы килмәһә, лимон ҡабығына шәкәр ҡушып ҡабыу ярҙам итә.

❖ Хроник геморрой көсәйгәндә көн дауамында (ике сәғәт һайын) лимон һуты эсеү ярҙам итә: бер эскәндә 2 ҡалаҡ.

❖ Гипотония, йәғни ҡан баҫымының түбәнәйеүе осрағында 1 лимондың һутын һығып, 50 грамм ҡыҙҙырып тартылған ҡәһүә һәм 0,5 кг бал ҡушырға. Ашағандан һуң 2 сәғәт үткәс 1-әр балғалаҡ ҡабул итергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Аңлауығыҙса, алдау юлы менән аҡса алыу схемаларын махсус хеҙмәттәр әҙерләй, был аҡса туранан-тура ВСУ-ны финанслауға йүнәлтелә. Халыҡ уларҙың тоҙағына эләкмәһен өсөн аңлатыу эштәрен алып барырға кәрәк.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Яғылбай, яғалбай
**(Дербник)**



Күгәрсендән вағыраҡ. Ата ҡоштоң өҫкө яғы күгелйем, көүҙәһенең аҫҡы өлөшө ерәнерәк, буй-буй һыҙаттары бар. Инә ҡоштоң аҫҡы яғы көрәнерәк, таптары була. Ҡойроғоноң осо түңәрәкләнеп тора, буй һыҙатлы.

Ағаста, ҡаяла, һирәгерәк ерҙә оя ҡора.

Һирәк осрай торған ҡош. Рәсәйҙең көньяғы һәм урта һыҙатында ҡышлай. Яғылбай 1897 йылда ғалимдар тарафынан беренсе тапҡыр Бәләбәйҙә теркәлә. Ғалимдар уны Таналыҡ йылғаһы үҙәнендә 1974 йылда тап итә. Ырымбурҙа иһә был ҡоштар оя ҡороп йәшәй, ҡайһы бер белгестәргә йомортҡа баҫып ултырған инә ҡошҡа ризыҡ ташыусы ата яғылбайҙы осратырға тура килә.

Ваҡ ҡоштар, кимереүселәр, бөжәктәр менән туҡлана.

### Мүктәрге
**(Кобчик)**



Осло ҡанатлы бөркөт төрө, күгәрсендән вағыраҡ. Ата ҡош ҡара төҫтә, ҡойроғоноң аҫты, аяҡтары ерән, күҙҙәре тирәһе - ҡыҙыл. Инә һәм йәш ҡоштарҙың өҫкө өлөшө арҡыры һыҙыҡтары булған күгелйем төҫтә, аҫҡы өлөшө иһә көрән, баштары ерән, "мыйыҡ"тары ҡара, ҡойроҡтары тар ғына.

Рәсәйҙең урта һыҙатында урмандарҙа йәшәй. Ояһын ағасҡа ҡора. Бөжәктәр менән генә туҡлана, һирәкләп кимереүселәргә һунар итә.

Ғалимдар мүктәргене Әбйәлил, Бөрө, Иглин, Мәләүез, Учалы, Өфө һәм республиканың башҡа райондарында күрә. Шулай уҡ Ағиҙел йылғаһы ағымы буйынса төрлө урындарҙа тап итергә була. Яҡтыкүл янында 1965 йылда 8 инә мүктәрге, 3 ата мүктәрге осраттыҡ. Көньяҡ Үләнде һәм Суртанды күлдәрендә лә был ҡош бар. Күрше Ырымбурҙа иһә ул оя ҡороп йәшәй.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*АЛДАНМАҒЫҘ!*

# МУТЛАШЫУСЫЛАР ҺАМАН МУТЛАША



**Мутлашыусылар республика халҡының аҡсаһын урлауҙы дауам итә: уларҙың алдағы үткән йылдарҙа ғына ла 5 миллион һумдан ашыу тәшкил иткән.**

Йылдарҙа таныш булмаған телефон номерҙарынан 67 йәшлек Өфө кешеһенә бер туҡтауһыҙ шылтыратҡандар. Шылтыратыусылар үҙҙәрен инвестиция компанияһы хеҙмәткәрҙәре итеп таныштырған, тәжрибәле брокер һәм торг үткәреүҙә оҫта булыуҙары тураһында һөйләгән. Улар пенсионерға килемле компанияларға инвестиция һалыу юлы менән өҫтәмә аҡса эшләргә тәҡдим иткән. Иргә быҙдай тиҙ аҡса эшләү идеяһы оҡшаған һәм ул әңгәмәне дауам иткән. Мутлашыусылар уның 1 миллион һумдан ашыу аҡсаһын "инвестиция портфеле"нә күсерткән, әммә ир вәғәҙә ителгән килемде алмаған. Шунан ғына полицияға мөрәжәғәт иткән...

Үткән аҙнала полицияға мөрәжәғәт иткән тағы бер ҡатын да баш ҡалала йәшәй. Уға ла берҙәнбер көндө таныш булмаған номерҙан шылтыратып: "Кәрәҙле бәйләнеш хеҙмәткәремен", - тип таныштырғандар. Шунан әлеге "хеҙмәткәр" ҡатындың телефонында "переадресация" функцияһы эшләүен, шуға уға килгән СМС-хәбәрҙәрҙе башҡалар ҙа уҡый алыуын хәбәр иткән. Был функцияны һүндереү өсөн пенсионер ҡатындың яҡындағы бәйләнеш салонына барыра мөмкинлеге булмағанын белгәс, "хеҙмәткәр" уны дистанцияла һүндерергә ярҙам итергә булған. Шунан ул "Кәрәкмәгән программаны һүндерҙем", тигән дә, телефонды һалған. Күпмелер ваҡыт үткәс, үҙен "банктың хәүефһеҙлек хеҙмәте хеҙмәткәре" итеп таныштырған тағы бер ҡатын шылтыратҡан һәм пенсионерҙың мәғлүмәттәре, йәнәһе лә, мутлашыусылар ҡулына эләгеү тураһында әйткән. Йәнәһе лә, кемдер ҡатындың банк иҫәбенән таныш булмаған номерҙарға аҡсаларын күсерергә маташҡан, был хәлде асыҡлау өсөн "полиция хеҙмәткәрҙәре" шылтыратасаҡ, тип белдергән.

Шулай килеп сыҡҡан да: мессенджерҙарҙың береһе аша ҡатынға 102 номерынан шылтыратыу килә, "дәүләт хеҙмәткәре" барыһын да белгән кеүек әңгәмәләшә һәм үҙе әйтеп тороп, полицияға ғариза яҙҙыра, был һөйләшеүҙе башҡаларҙан сер итеп һаҡларға ҡуша. Тәфтиш барышын фашламау өсөн, йәнәһе. Ҡатын "ғариза"ны яҙа, фотоға төшөрә һәм мутлашыусыға ебәрә. Уныһы артабан күрһәтмәләр көтөргә бойора.

Артабан үҙен "финанс хеҙмәткәре" тип таныштырған ҡатын тәфтиш тикшереүе барған ваҡытҡа пенсионерҙан аҡсаларын "хәүефһеҙ иҫәп"кә күсереп тороуын һорап шылтырата. Шулай уҡ банкка барып мөрәжәғәт иткәндә ундағы хеҙмәткәрҙәр өҫтәмә һорау бирә башлаһа, үҙен телефон кенәгәһенә "ҡыҙым" тип теркәп тороуҙы үтенә. Иҫәптән ҡулҡса алыу сәбәбен ҡыҙына бурыстың бер өлөшөн ҡайтарыу, тип аңлатырға ҡуша. Артабан мутлашыусылар үҙҙәре такси саҡыртып, пенсионерҙы банкка ебәрәләр. Уныһы бөтә йыйған аҡсаһын өйөнә алып ҡайта. Шунан мутлашыусылар был сумманы 4 өлөшкә бүлеп, үҙҙәре әйткән банк иҫәптәренә төрлө банкоматтар аша күсерергә ҡуша.

Алдаҡсылар тоҙағына ҡапҡан пенсионер ҡатын быларҙың "бойороғон" үтәгән саҡта уға ысын банк хеҙмәткәрҙәре әллә нисә тапҡыр килеп мөрәжәғәт иткән, ярҙам итергә тырышҡан. Әммә ҡатын тәфтиш серен асыуҙан ҡурҡып, таныш булмаған кешеләр менән телефондан аралашыуын йәшергән.

Аҡса күсереп бөткәндән һуң алдаҡсылар хатлашыу һәм шылтыратыуҙар тарихын юйҙырырға ҡушҡан. Әммә алдаҡтары быының менән генә тамамланмаған. Бер аҙ ваҡыт үткәс, шул уҡ ялған банк хеҙмәткәре шылтыратып, "Аферистар пенсионер ҡатындың мәғлүмәттәрен белгән һәм уның исеменә кредит алырға маташа", тип хәбәр иткән. Быны кисектереү өсөн 360 һумлыҡ кредит лимитын тотонорға тәҡдим иткән. Ләкин оло кешегә банкта кредит биреүҙән баш тартҡандар. Мутлашыусылар шунан һуң ғына ҡорбанын тоҙаҡтан ысҡындырған һәм бәйләнешкә сығыуҙан туҡтаған. Шунан ғына алданып ҡалған ҡатын полицияға мөрәжәғәт иткән. Һөҙөмтәлә мутлашыусылар уның 1 миллион һум аҡсаһын урлаған. Был мутлыҡ осраҡтары буйынса енәйәт эше ҡуҙғалтылған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығы таныш булмаған кешеләрҙең таныш түгел иҫәптәренә аҡса күсермәҫкә өндәй. Быҙдай осраҡтарҙың күпселеге бурысҡа батыуға һәм йыйылған шәхси аҡсаларҙан ҡолаҡ ҡағыуға килтерә. Шәхси һәм банк мәғлүмәттәрен сит кешеләргә әйтмәгеҙ. Мутлашыусылар шылтыратһа, һөйләшеүҙе тамамлап, ҡыҙыл төймәгә баҫығыҙ. Был үҙегеҙҙе һәм милкегеҙҙе һаҡлар.**

**Вадим САҘРЕТДИНОВ,**
**БР буйынса Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәткәре.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# КҮМӘКЛӘП ИҪКӘРТӘЙЕК!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Патриот" хәрби-патриотик паркындағы республиканың ауыл биләмәләре башлыҡтарының семинары барышында уларҙан халыҡҡа телефон аша мутлашыусылар тураһында мәғлүмәт еткереүҙәрен һораны.**

- Аңлауығыҙса, алдау юлы менән аҡса алыу схемаларын махсус хеҙмәттәр әҙерләй, был аҡса туранан-тура ВСУ-ны финанслауға йүнәлтелә. Халыҡ уларҙың тоҙағына эләкмәһен өсөн аңлатыу эштәрен алып барырға кәрәк, сөнки күптәр фатирҙарын һата, кредитҡа бата һәм һуңынан бер нәмәһеҙ тороп ҡала. Бының ниндәй хәүеф менән янауын аңларға тейешһегеҙ. Кеше ышана, фатирын һата, аҡса ебәрә һәм ыштанһыҙ ҡала. Шунан һуң ошо уҡ кеше уға шылтыратып: "Йә, бер нәмәһеҙ ҡалдыңмы?" - ти. Шунан: "Шартлат йәки яндыр", - ти йәки башҡа күрһәтмәләр бирә. Тимәк, бының тағы ла ауыраҡ әҙемтәләргә килтереүе ихтимал. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, енәйәт ҡылыу осраҡтары ла бар. Ошо яуызлыҡҡа ҡаршы берәгәләп көрәшергә кәрәк, - тип билдәләне республика етәксеһе.

Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, 2023 йылда республикала йәшәүселәр телефон һәм онлайн-мутлашыусыларға яҡынса өс миллиард һум күсергән. "Быйыл мутлашыу схемаһы буйынса миллиард ярым һум аҡса ебәрелгән. Был аҡса дошман армияһына ярҙам итеү өсөн тотонола. Халыҡҡа нисек аңлатырға ла белмәйбеҙ, ләкин аңлатыу эшен алып барыу мөһим", - тине Радий Хәбиров.

"Вебер" агентлығы тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, рәсәйҙәрҙең 88 процентына мутлашыусылар шылтыратҡан йәки смс-хәбәр ебәргән, ә уларҙың 10 проценты шул сәбәпле аҡсаһын юғалтҡан.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# Шифа

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

39

26 июль - 1 август (майай - урағай)

2024 йыл

№29 (1122)


ҮӘТ, ШУЛАЙ!



## ТИҘ ЯРҘАМ ТИҘ КИЛҺЕН!

**Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ашығыс медицина ярҙамы күрһәтеү (НМП) буйынса берҙәм стандарт системаһын ғәмәлгә индерә башлай. Төбәктең һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә буласаҡ үҙгәрештәр хаҡында һаулыҡ һаҡлау министры Айрат РӘХМӘТУЛЛИН үҙенең социаль селтәрендә яҙҙы.**

Кисектергеһеҙ медицина ярҙамы (НМП) нимә ул? Был ике сәғәт дауамында кешегә өйҙә күрһәтелә торған медицина ярҙамы. Йыш ҡына ул киҫкен сир ваҡытында, шулай уҡ кеше ғүмеренә янамаған хәлдә лә кинәт кенә хроник ауырыу башланып киткән осраҡта талап ителеүсе медицина ярҙамы. Һәр бер поликлиниканың үҙендә ашығыс ярҙам күрһәтеүҙең үҙ моделе була. Шуға күрә уның кимәле төрлөсә булыуы ихтимал. Ә был иһә һәр төрлө ойоштороу эштәренә ҡамасаулыҡ итеүе лә бар, мәҫәлән, медицина хеҙмәткәрҙәренә артығыраҡ бурыстар өҫтәлеп, шул арҡала өйҙә тиҙ ярҙам күрһәтеү ваҡыты тоткарланыуы мөмкин.

Тиҙ ярҙам күрһәтеүҙе камиллаштырыу һәм бер төрлө системаға һалыу өсөн Һаулыҡ һаҡлау министрлығы тарафынан берҙәм стандарт эшләнде.

**Нимә үҙгәрәсәк?** Тиҙ ярҙам күрһәтеүҙең берҙәм стандарты пациенттарҙың мөрәжәғәттәрен анализлау, уларҙы оператив рәүештә темаларға бүлеү һәм контролгә алыуҙы күҙҙә тота. Ярҙам күрһәтеү тиҙлеге һәм бөтә урынға ла өлгөрөү мөрәжәғәттәрҙе өйрәнеүгә бәйле буласаҡ. Ҡайһы бер осраҡтарҙа телемедицина консультацияһы йәки көн дауамында сирленең өйөнә барыу ҙа етә, шул уҡ ваҡытта ике сәғәт эсендә ярҙам күрһәтеп өлгөрөү ҙә мөһим булған хәлдәр бар. Кисектергеһеҙ медицина ярҙамы алгоритмының яңыса стандарты бер нисә мөһим этаптан тора.

**Беренсеһе.** Был пациенттың ярҙам һорап 113 йәки 122, колл-үҙәк һәм поликлиниканың регистратураһы аша, шулай уҡ "Госуслуги" хеҙмәте аша мөрәжәғәте.

**Икенсеһе.** Мөрәжәғәттәрҙе эшкәртеү һәм уларҙы ҡатмарлылыҡ категорияһына ҡарап бүлеп сығыу: өйгә килеп, ике сәғәт эсендә ярҙам күрһәтеү; 24 сәғәт эсендә өйгә килеп ярҙам күрһәтеү йәки телемедицина консультацияһы үткәреү.

Кисектергеһеҙ медицина ярҙамы командаһында кемдәр эшләй? Диспетчер, медицина ярҙамы күрһәтеү бүлексәһе табиптары һәм фельдшерҙар, телемедицина табиптары.

МЕДИЦИНА ХӘБӘРҘӘРЕ

## КӘМЕГӘН ДӘ УЛ...



**Башҡортостанда онкология сиренән үлем осраҡтары кәмей, тип хәбәр итә республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, төбәктә яман шештән үлем күрһәткесе 2019 йылда 100 мең кешегә 179,3 осраҡ тәшкил иткән, 2023 йылда - 154,9.**

Башҡортостанда онкология хеҙмәтен үҫтереү һөҙөмтәһендә юғары һөҙөмтәләргә өлгәшелде. Атап әйткәндә, "Һаулыҡ һаҡлау" милли проектының "Онкология ауырыуҙары менән көрәш" төбәк программаһы пациенттар тикшереү үткән 13 күп профилле медицина ойошмаһы нигеҙендә амбулатор онкология ярҙамы үҙәктәрен булдырырға мөмкинлек бирҙе, тип билдәләнә. Бынан тыш, онкология диспансерының 10 филиалында тәүлек әйләнәһенә эшләгән бүлексәләр һәм шешкә ҡаршы терапияның көндөҙгө стационарҙары асылған. Былар барыһы ла шешкә ҡаршы заманса терапияны яҡшыртырға мөмкинлек бирә.

"Башҡортостанда яман шештең һәр икенсе осрағы иртә стадияла асыҡлана. Бынан тыш, бер йыллыҡ үлем осраҡтарының кәмеүе күҙәтелә. Ярҙам күрһәтеү сифатын яҡшыртыу биш йыллыҡ йәшәү кимәлен арттырыуға йоғонто яһаны, 2020 йылдан был күрһәткес 11 процентҡа артҡан",- ти Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш баш белгесе Рөстәм Әйүпов.

Телемедицина консультациялары (ТМК) пациентты тикшереү логистикаһын яҡшыртты. Алыҫ ауылдарҙа йәшәүселәргә гел генә Өфөгә килергә кәрәкмәй. ТМК-ны "табип-пациент" форматында хатта ФАП-та ла үткәрергә мөмкин. Мәҫәлән, былтыр онкология профиле буйынса 60 меңдән ашыу телемедицина консультацияһы үткәрелгән.

Әлеге ваҡытта Республика онкология диспансерында молекуляр-генетик маркерын билдәләү практикаға индерелә, ул йыуан эсәк яман шеше, тире меланомаһы, бәләкәй күҙәнәкле үпкә шешен пациенттарҙың туғандарында асыҡларға мөмкинлек бирәсәк, тип билдәләнеләр республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығында.

**Эдуард ҠУСҠАРБӘКОВ.**

## МӘКТӘПТӘ - ТӘМӘКЕ ТАРТЫУСЫЛАР



**Башҡортостанда мәктәп һәм балалар баҡсалары биләмәһендә тәмәке тартҡан өсөн яуаплылыҡты көсәйтергә тәҡдим иттеләр. "Рәсәй Федерацияһының административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы Кодексының 6.24-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" федераль закон проекты БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары тарафынан Дәүләт Думаһына индерелде.**

"Закон проекты балаларҙы никотиндан һаҡларға, мәктәп мөхитендә тәмәке тартыу масштабын ҡыҫҡартырға тейеш, - тип аңлатма бирҙе БР Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Беҙ биләмәләрҙә йәки мәктәп һәм балалар баҡсалары биналарында тәмәке тартыуҙы административ хоҡуҡ боҙоуҙың айырым составына сығарырға тәҡдим итәбеҙ. Был бындай хоҡуҡ боҙоуҙарҙы икенсе төрлө баһаларға һәм 2000 һумдан 3000 һумға тиклем штраф һалырға мөмкинлек бирәсәк. Әлеге ваҡытта мәктәптә тотолған тәмәке тартыусылар 500-1500 һум штраф түләп ҡотола".

Парламент спикеры әйтеүенсә, Рәсәйҙә балалар араһында тәмәке тартыу проблемаһы йылдан-йыл көсәйә бара. Статистика буйынса, өлкән класс уҡыусыларының 60 проценты тәмәке тарта. Наркологтар һуңғы йылдарҙа балиғ булмағандар араһында никотин ҡулланыуҙың артыуын баҙарҙа электрон тәмәке барлыҡҡа килеүе, вейп модаһы менән бәйләй, бигерәк тә тәүге осорҙа уларҙың зарарһыҙлығы тураһында фекерҙәр булғайны бит. Был кире тенденцияны үҙгәртергә кәрәк. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бөтә тәмәке тартыусыларҙың 56 проценты тәүге тәмәке тартыу тәжрибәһен тап мәктәптә алған. Административ яуаплылыҡтың ҡатыланыуы профилактик эштең көсәйеүе менән бергә барырға тейеш. Әгәр ҡағиҙә боҙоусы яуаплылыҡҡа тарттырыу йәшен тултырһа, штраф һалыу ғына түгел, ә был хаҡта коллективҡа класс сәғәте, йыйылышта хәбәр итеү ҙә кәрәк. Был иҫкәртеү сараһы булып хеҙмәт итәсәк һәм дисциплинаны нығытасаҡ.

## ҒҮМЕР ОҘАЙЛЫҒЫ...



**Башҡортостанда уртаса ғүмер оҙайлығы 73 йәштән уҙҙы. Был иһә республика тарихында рекордлы күрһәткес. Әммә республикабыҙҙа төп бурыс уртаса ғүмер оҙайлығын арттырыу ғына түгел, уның сифатын да күтәреү. Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһе Максим Забелин шулай тип иҫәпләй.**

Максим Забелин Дәүләт Думаһының һаулыҡ һаҡлау буйынса комитетының республика Дәүләт Йыйылышында уҙған күсмә ултырышы эшендә ҡатнашты. Унда "Өлкән быуын" федераль проектын ғәмәлгә ашырыу тураһында һүҙ барҙы. "Һис шикһеҙ, бында тәү сиратта һаулыҡ һаҡлау өлкәһен нығытыуға көс һалына. Башҡортостанда был мәсьәләгә республика етәксеһе Радий Хәбиров яғынан етди иғтибар бүленә. Бер нисә һан килтерәм. 2019 йылдан башлап төбәктә 14 заманса поликлиника һәм дауахана, 350-нән ашыу фельдшер-акушерлыҡ пункты төҙөлгән. Былтыр ғына 4 поликлиника һәм бер ашығыс медицина ярҙамы дауаханаһы сафҡа индерелгән, 4230 берәмек ҡорамал һәм 185 берәмек медицина автотранспорты һатып алынған. Был эш әле лә дауам ителә.

Йәшәү сифатына башҡа факторҙар ҙа йоғонто яһай. Социаль йүнәлеш, ололар өсөн тейешле инфраструктураның булыуы, уңайлы шарттар булдырыу. Белеүегеҙсә, беҙҙең ҡыҙыҡлы һәм күптәр яратып өлгөргән "Башҡортостанда оҙон ғүмерлелек" проекты бар. Ошо йылдар дауамында уға 690 меңдән ашыу кеше йәлеп ителде. Бынан тыш, ололарға республика буйлап экскурсияларға сертификаттар бирелә һәм илдәге, шулай уҡ Белоруссияға туристик сәфәрҙәр субсидиялана. Быйыл көҙҙән башлап Үзбәкстан йүнәлешендә әүҙем эшләргә уйлайбыҙ. Республикала ГТО нормативтарын үтәгән 60 йәштән өлкәнерәк граждандарға спорт ойошмаларында бушлай шөғөлләнеү өсөн 10 мең һумлыҡ сертификат тапшырыла. Быйыл 2 250 кешегә бирелә. Был проект илдә иң яҡшыларҙың береһе тип танылды. Иң мөһиме - тормошҡа ҡыҙыҡһыныуҙы юғалтмау. Ә беҙ был йәһәттән ярҙам итергә әҙер", - тип билдәләне Максим Забелин.

## АУЫЛ ТАБИПТАРЫНА...



**Рәсәйҙә ауылда медицина хеҙмәткәрҙәренә ярҙам күрһәтеү параметрҙары көсәйтелә. Президент ҡушыуы буйынса Хөкүмәт ғәмәлдәге "Ауыл табибы" һәм "Ауыл фельдшеры" программалары сиктәрендә медицина хеҙмәткәрҙәренә компенсация алыу шарттарын йомшарта.**

Министрҙар Кабинетының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, хәҙер бер тапҡыр бирелә торған компенсация түләүе тураһында килешеү ғәмәлдә булған ваҡытта медицина хеҙмәткәрҙәре бер тапҡыр эш урынын алмаштырырға - шул уҡ төбәктең икенсе һаулыҡ һаҡлау ойошмаһына күсергә мөмкин. Шулай уҡ дәүләт башлығы тәҡдиме менән яңы төбәктәрҙә ошо программаларҙа ҡатнашыусылар өсөн түләү күләме ике тапҡырға арттырылды: табиптар өсөн - 2 миллион һумға тиклем, фельдшерҙар, акушерҙар һәм шәфҡәт туташтары өсөн - 1 миллион һумға тиклем. Был маҡсаттарға 1 миллиард һумдан ашыу ҡаралған, шуның 350 миллиондан ашыуы - ағымдағы йылға.

ТАБИП МЕНӘН ӘҢГӘМӘ

# БАЛА САҠ ХЫЯЛЫ ИНЕ...

## балалар табибы булыу

**Балаларҙың һаулығы хаҡында хәстәрлек - киләсәк быуын мәнфәғәтен яҡлау өлкәһендәге дәүләт сәйәсәтенең мөһим бурыстарының береһе ул. Былтыр Башҡортостанда балалар һәм үҫмерҙәрҙең 98 проценты һәр төрлө сирҙәрҙе иҫкәртеү һәм ваҡытында дауалау маҡсатында профилактик тикшереүҙәр үтте. 3,6 мең бала махсуслаштырылған һәм юғары технологик ярҙам алған булһа, 1,7 мең бәләкәй пациент Рәсәй медицина ойошмалары хеҙмәттәренән файҙаланды. 2023 йыл башынан алып республикала 36 төр нәҫелдән һәм тыуымыштан сирҙәрҙе асыҡлау маҡсатында киңәйтелгән неонаталь скрининг алымы индерелде. Ошо һәм башҡа бик күп саралар арҡаһында былтыр балалар үлеме 7 процентҡа кәмене һәм ул 1000 балаға 3,9 осраҡ тәшкил итә. Был юҫыҡта республиканың балалар табиптары хеҙмәте ҙур баһаға лайыҡ. "Сирле балаларҙы дауалауға ҡарағанда уны иҫкәртеүе мәртәбәлерәк һәм хәйерлерәк,"- ти Өфөләге Фомин медицина клиникаһы педиатры Рүзәлиә ӘЛИМҒУЖИНА һәм балалар һаулығын һаҡлау хаҡында гәзитебеҙ хәбәрсеһенең ҡайһы бер һорауҙарына яуаптар бирҙе.**

**Рүзәлиә Мәзит ҡыҙы, Һеҙ Рәсәйҙең тиҫтәнән ашыу ҡалаһында егермеләп медицина үҙәге асылған һәм заманса IT инфраструктураһы, бөтөн диагностик аппаратураһы һәм үҙ лабораториялары булған әсә һәм бала йүнәлешендәге Фомин клиникаһы филиалында эшләйһегеҙ. Бындай үҙәк табибы булыу яуаплылыҡ өҫтәйме һәм дәүләт муниципаль поликлиникаларынан нимәһе менән айырыла?**

- Фомин клиникаһы, әле үҙегеҙ ҙә әйтеп китеүегеҙсә, иң тәүҙә әсә һәм бала һаулығы йүнәлешендә асылған булһа ла, бындай үҙәктәргә ихтыяж талаптарынан сығып, икенсенән, күпселек махсус йүнәлештә эшләүсе табиптарҙың бер клиника сиктәрендә кескәйҙәрҙе лә, өлкәндәрҙе лә ҡабул итеү уңайлыҡтарын иҫәпкә алып, үҙәктең медицина хеҙмәте төрҙәре артабан киңәйтелә бара. Йәғни хәҙер бында пациенттарға бөтөн белгес-табиптар тарафынан амбулатор күҙәтеүҙән алып, хирургик дауалауҙарға тиклем хеҙмәттәр күрһәтелә. Балалар һаулығы әсәләрҙең йөклөлөк осоронан алып күҙәтелә башлай. Ә инде балаға уҙа алмаусы ҡатындарға генетик тест үткәрелә, ЭКО процедураһы башҡарыла.

Муниципаль дауалау учреждениеларынан был Үҙәк иң тәүҙә ана шундай күп яҡлы уңайлыҡтары менән айырылып тора, тип әйтер инем. Йәғни, бөтәһе лә бер урында һәм, мәҫәлән, гастроэнтеролог йә гематолог кеүек махсуслашҡан белгес табиптарға эләгеүе дәүләт клиникаларындағы кеүек ҡатмарлыҡтар тыуҙырмай, оҙон сираттар юҡ, терапевтан бер нинләй ҙә йүнәлтмә кәрәкмәй. Ә бит муниципаль поликлиникаларҙа бындай йүнәлтмә алыу өсөн терапевтың үҙенә яҙылған хәлдә лә, ҡабул итеү сәғәтен ике-өс аҙналай ваҡыт көтөргә тура килә. Дөрөҫ, коммерция клиникалары түләүле, һәр кем дә уның хеҙмәттәренән файҙалана алмай, ләкин табипҡа бик ашығыс күренергә кәрәк булып киткәндә йә оператив ярҙам алыу өсөн, нишләйһен - түләргә лә тура килә шул. Был һис тә түләүле клиникалар хеҙмәтен рекламалау түгел, ә редакцияның һорауына яуап ҡына тип ҡабул итһен ине уҡыусы. Дәүләт һаулыҡ һаҡлау системаһының халыҡ өсөн уңайһыҙ булған ауыр шарттарҙа эшләүе бер кемгә лә сер түгел. Ә кескәйҙәр һаулығын һаҡлау айырыуса иғтибар һәм оперативлыҡ талап итә. Шуға ла эшләп аҡса табыусы йәш ата-әсәләр балаларын түләүле клиникаларға йөрөтөргә тырыша. Яуаплылыҡ мәсьәләһенә килгәндә иһә, ул табиптың ҡайҙа, ниндәй дауалау ойошмаһында эшләүенә ҡарамай, ул бөтөн табиптарҙан да бер кимәлдә - юғары кимәлдә талап ителә.

**Ни өсөн балалар табибы һөнәрен һайланығыҙ? Өлкәндәрҙән айырмалы рәүештә кескәй пациенттар менән эшләү айырым бер сифаттарға эйә булыуҙы талап итәлер бит: бәләкәстәр сирҙәре хаҡында һөйләй, аңлата алмай, шунлыҡтан диагноз ҡуйыу, дауалау тәғәйенләүҙә икеләнеүҙәр килеп сығыуы ла бик ихтимал. Шулай түгелме?**

- Балалар менән эшләүе, әлбиттә, еңел түгел. Ул педиатрҙан, ысынлап та, икеләтә иғтибар, белем һәм тәжрибә талап итә. Эш стажым әле ҙур булмаһа ла, балалар алдында юғалып ҡалмаҫҡа өйрәндем. Диагноз ҡуйғанда баланың әсәһе күп мәғлүмәт бирә, унан баланы ентекләп ҡарау, сир билдәләрен теркәү, анализ һөҙөмтәләренә таяныу, өҫтәлмә тикшеренеүҙәр үткәреү (әйткәнемсә, был клиникала бөтөн төр диагностик ҡорамалдар бар), ғәҙәттә, икеләнеүҙәргә урын ҡалдырмай. Ғөмүмән, мин был һөнәремә психологик яҡтан әҙерлекле килдем, тип әйтә алам, сөнки мәктәптә уҡығанда уҡ балалар табибы булырға хыяллана инем. Һәм бала саҡ хыялыма тоғро ҡалдым: Мәләүез ҡалаһының 9-сы Башҡорт гимназияһын тамамлағас та Ырымбур дәүләт медицина университетына уҡырға индем һәм 6 йыл уҡығас, Башҡорт дәүләт медицина университетында ике йыл ординатура үттем. Эшемде яратам, шуға күрә балалар менән эшләүе миңә ҡыйынлыҡтар тыуҙырмай.

**Бөгөн балалар табибына ниндәй сирҙәр буйынса йышыраҡ мөрәжәғәт итәләр?**

- Балалар араһында, ниндәй миҙгел осоро булыуға ҡарамаҫтан, энтеровирус инфекцияһы киң таралған. Был әсәк вирусы һауа-тамсы юлы аша йоға. Уны балаларҙың берәүҙәре - еңел, ҡайһылары ауыр кисерә һәм хатта айырым осраҡтарҙа полиомиелит, менингит, энцефалит кеүек ҡатмарлашыуҙарға килтереүе лә бар. Баш һәм тамаҡ ауырта, тән температураһы күтәрелә, ауыҙ ҡыуышлығы һәм тәнгә сабыртма сыға. Был вирусты кескәйҙәр, ғәҙәттә, балалар баҡсаһында йоҡтороп ҡайта, шуға күрә респиратор эпидемия осорҙарында баланы баҡсаға йөрөтмәй тороу хәйерлә. Өлкәндәргә үткәрелеүсе диспансеризацияның айырмалы, балалар һаулығы даими, хатта, әйтергә яраһа, көндәлек контролдә. Сабый донъяға килгәс тә уның һаулыҡ торошо, айырыуса тәүге осор - уға бер йәш тулғансы табип күҙәтеүе һәм хәстәрлегенә алына. Бер айлыҡ сағында педиатр көмендә өс тапҡыр баланы өйгә килеп ҡарай. Унан инде квартал һайын махсуслашҡан белгес-табиптар тарафынан медицина тикшереүе үткәрелә.

Ғөмүмән, 14 йәшкә тиклем балаларҙа тын юлдары ауырыуҙары беренсе урында тора. Дөрөҫөн әйткәндә, йыл әйләнәһенә һәр бер бала тип әйтерлек һалҡын алдырып сирләй. Ата-әсә шуны аңларға тейеш: һалҡын тейҙереп ауырыуҙы ябай сиргә иҫәпләп, иғтибарһыҙ үткәреп ебәреү ярамай, сөнки ул бер ваҡытта ла эҙемтәһеҙ ҡалмай. Ҡатмарлыҡтар башланып, үпкә елһенеүе (пневмония), бронхит башланып китмәһен өсөн һәм бигерәк тә бактериаль ангина йөрәккә, бөйөрҙәргә һәм быуындарға ҡатмарлыҡтар бирмәһен, тиһәгеҙ, бала сирләй башлағас та табип-педиатрға күренергә, анализдар тапшырырға, кардиограмма үтергә һәм был көндәрҙә тулыһынса күҙәтеү аҫтында булыу мотлаҡ талап.

ОРЗ, ОРВИ сирҙәренән башҡа тағы ла аш һеңдереү ағзалары, нервы системаһы, күҙ һәм тире ауырыуҙары буйынса беҙгә йыш мөрәжәғәт итәләр. Вегетатив нервылар системаһының боҙолоуы күберәк мәктәп йәшендәге балаларҙа осрай. Улар, ғәҙәттә, баш ауырыуына зарлана, көйһөҙлөк, ҡыҙып китеүсәнлек күҙәтелә. Аш һеңдереү ағзалары сирҙәре дөрөҫ туҡланмауҙан, ғаиләлә туҡланыу мәҙәниәте булмауҙан, ата-әсәләр тарафынан баланың тәм-томға талаптарын көйләй алмауҙан барлыҡҡа килә. Нисек кенә булһа ла, ауырыу бала иң тәүҙә ғаилә эсендә барлыҡҡа килеүсе проблема. Шуның өсөн был йәһәттән ваҡ мәсьәлә юҡ: баланың көн режимын теүәл үтәүе, ваҡытында йоҡларға ятыуы (таң атҡансы интернетта ултырыуға юл ҡуймаҫҡа!), нисек ашауын, хатта бәҙрәфкә барыуын да контролдә тотоу мөһим, әгәр балаң сәләмәт кеше булып үҫһен, тиһәң.

Әйткәндәй, үҫмер йәштәге балаларҙың алкоголь ҡулланыу һәм электрон сигарет, вейп менән мауығыуҙары кеүек хәүефле ғәҙәттәренә айырым туҡталып китеү кәрәк, тип уйлайым, сөнки бөгөн бындай күренештәр торған һайын кинерәк тарала бара. Әйе, был йәштә үҫмерҙәрҙә



*Аш һеңдереү ағзалары сирҙәре дөрөҫ туҡланмауҙан, ғаиләлә туҡланыу мәҙәниәте булмауҙан, ата-әсәләр тарафынан баланың тәм-томға талаптарын көйләй алмауҙан барлыҡҡа килә. Нисек кенә булһа ла, ауырыу бала иң тәүҙә ғаилә эсендә барлыҡҡа килеүсе проблема. Шуның өсөн был йәһәттән ваҡ мәсьәлә юҡ: баланың көн режимын теүәл үтәүе, ваҡытында йоҡларға ятыуы (таң атҡансы интернетта ултырыуға юл ҡуймаҫҡа!), нисек ашауын, хатта бәҙрәфкә барыуын да контролдә тотоу мөһим, әгәр балаң сәләмәт кеше булып үҫһен, тиһәң.*

*✓ Тарихтан мәғлүм булыуынса, боронғо Греция изгеләре төрлө спорт менән шөғөлләнеүселәр ҡиәфәтендә һүрәтләнгән. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадында ла спортҡа тура бәйләнеш ярылып ята. Йүгерек батыр, Тау батыр һ.б.*



уларҙың киләсәген юҡҡа сығарырлыҡ кимәлдә ҙур хәүефтәр һағалай. Тап бына ошо осорҙа, уларҙың ғаиләнән ситләшеүенә ҡарамаҫтан, ата-әсәләр мөмкин тиклем үҫмер балалары менән бергәрәк булырға, күҙ яҙлыҡтырмай ҡурсаларға тейештәр, юғиһә, аҙаҡ һуң булыуы бар. Баланың алкоголгә тартылыуы күбеһенсә шулай уҡ ғаиләнән, ата-әсә "өлгөһө"нән, ҡунаҡтар, иҫерек мәжлестәр йоғонтоһонан башланыуын иҫтән сығарырға ярамай һәм шуның өсөн дә ата-әсәгә ғаиләлә тулы тәртип, айыҡлыҡ, сәләмәт ғәҙәттәр өсөн даими көрәшеп йәшәргә кәрәк, тип уйлайым.

**Быйыл Рәсәйҙә, шул иҫәптән, Башҡортостанда ла балаларҙың ҡыҙылса (корь) менән ауырыу осраҡтары йышайып китте. Ошо хәлгә, балалар табибы буларaҡ, һеҙ ниндәй аңлатма бирә алаһығыҙ?**

- Эйе, быйыл Рәсәй буйынса ҡыҙылса менән ярайһы ҡатмарлы хәлдәр күҙәтелеп алды. Уның тәүге осраҡтары 2022-2023 йылдарҙа уҡ теркәлгәйне инде. Былтыр Башҡортостанда 142 осраҡ, йәғни унан алдағы йылға ҡарағанда 69-ға күберәк кеше ауырыған. Быйыл да республика райондарында һәм Өфөлә ҡыҙылса сире менән ауырыусылар килеп сығып тора. Онотолған был сир ҡайҙан килеп сыға һуң, тип ҡыҙыҡһына ҡайһы бер пациенттар. Ваҡытында балаларына прививка эшләтеүҙән баш тартҡан кешеләр арҡаһында сир ана шулай ҡалҡып сыға башлай. Мәҫәлән, бөгөнгө көндә сирләүселәрҙең 89 проценты ҡыҙылсанан вакцина яһатмаған кешеләр булып сыҡты. Айырыуса был Өфөлә йәшәүсе сиған халҡы, дини общиналарҙа торған ғаиләләрҙә теркәлгән. Ҡыҙылса үҙ-ара аралашҡанда һауа-тамсы юлы менән бик тиҙ йоға торған хәүефле сир. Уның билдәләре: юғары температура. Тәүге көндәрҙә ул 39-40 градусҡа күтәрелә һәм 3-4 көн буйына дауам итә, йүткерек, тымау һәм конъюнктивит; тәнгә сабыртма сыға (сир йоғоп, 3-5 көн үткәс, биткә, муйынға, унан тәнгә, ҡул һәм аяҡтарға күсә). Нимәһе менән хәүефле был сир? Уның ҡатмарлашыуы кеше һаулығы өсөн ауыр эҙемтәләргә килтереүе мөмкин. Мәҫәлән, отит, йәғни ҡолаҡ сире айырыуса кесе йәштәге балаларҙы зарарлай. Пневмонияға килтереүе ихтимал. Энцефалит, йәғни мейе елһенеүе, ул нервылар системаһын боҙа, хатта үлем осраҡтарына сәбәп булыуы ихтимал. Иммунитетты көсһөҙләндерә. Ҡыҙылса айырыуса йөклө ҡатындар өсөн ҡурҡыныс: сабыйҙың ваҡытынан алда тыуыуына, етлекмәй донъяға килеүенә һәм яралғының зыянланыуына килтерә.

Республикала ҡыҙылсаға ҡаршы иммунизация үткәреү дауам итә. Роспотребнадзор мәғлүмәтенә ҡарағанда, бөгөнгә көнгә 36 меңдән ашыу кешегә вакцина эшләнгән, шул иҫәптән уларҙың 33,7 меңе - балалар. Вакцинация был хәүефле сирҙән ҡотолоуҙың иң һөҙөмтәле юлы.

**Баланың тән температураһы күтәрелеп ауырығанда, ҡайһы бер ата-әсә күп уйлап тормаҫтан, анальгин, аспирин кеүек дарыу төймәһе бирергә әҙер тора. Был йәһәттән ни әйтерһегеҙ?**

- Эйе, температура күтәрелгәндә, ысынлап та, ҡайһы бер ата-әсәләр баҙап, ҡурҡып ҡалыусан, ләкин бик ҡурҡырға ла ярамай. Тәүҙә температура күтәрелеү сәбәбен асыҡлайыҡ. Әгәр был ОРВИ йәки грипп икән һәм температура бик юғары булмаһа, баланың тирләүенә өлгәшергә тырышығыҙ. Мәҫәлән, уға күберәк шыйыҡлыҡ: бик татлы булмаған күләмдә компот, минераль һыу, үлән төнәтмәһе, емешеләк һыуы (ҡурай еләге, ҡарағат, мүк еләге һ.б. ) эсерегеҙ, ә инде температураһы 38-ҙән артып киткән осраҡта, әлбиттә, дарыу бирергә һәм кисекмәҫтән табип саҡыртырға кәрәк.

Ә бына ҡул аҫтында бындай осраҡҡа ниндәй дарыуҙар булырға тейеш? Тән температураһын төшөрөүсе сағыштырмаса зыянһыҙ йәки әллә ни хәүефленән булмаған ике төр дарыу бар: ибупрофен һәм парацетамол. Ә бына махсус балалар өсөн тағы бер препарат - цефекон Д ( составында шул уҡ парацетамол) ректаль суппозиторийҙы 3 айлыҡтан алып 12 йәшкә тиклем балаларға ҡулланырға мөмкин. Парацетамол төймәһен баланың кәүҙә ауырлығына ҡарап (1 кг ауырлыҡҡа 15 мг иҫәбенән) 4-6 сәғәт һайын тәүлегенә 4 тапҡырҙан да артыҡ бирмәҫкә кәрәк. Был дарыуҙарҙың тәьҫире ярты - бер сәғәттән һуң башлана. Әгәр баланың температураһы 0,5-1 градусҡа булһа ла төшһә, тимәк, дарыуҙы тейешле дозала артабан ҡулланырға мөмкин. Ә бына түбәндәге дарыуҙарҙы балаларға биреүҙән тыйылырға кәңәш итер инем:

- анальгин - уның агранулоцитоз тип аталған кире тәьҫире бар, йәғни ҡан составындағы гранулоциттар күрһәткесе түбәнәйеп, уларҙың ҡан яһалыш функцияһы боҙолоуы ихтимал.
- аспирин - уны ҡулланыу баш мейеһе һәм бауыр өсөн зыянлы; ҡанды шыйыҡлата.
- но-шпа - 6 йәшкә тиклемге балаларға бирмәҫкә. Өҫтәүенә, тән температураһына уның ҡыҫылышы ла юҡ.
- нимесулид - бауыр өсөн зарарлы.

**Гөлфиә МӨХӘМӘТШИНА әңгәмәләште.**

ПСИХОЛОГ КӘҢӘШЕ

# НЕРВЫЛАРЫҢ ҠАҠШАҺА...

## сәхрәгә сығып ҡысҡыр!



**Беҙ ҡатмарлы тормошта йәшәйбеҙ: иртәнән кискә тиклем, тамам арығансы эшләйбеҙ, ҡай сағында хеҙмәт коллективында конфлитҡа инергә тура килә, быны еңел генә кисереп булмай. Етмәһә, ғаиләндә лә һауыт-һаба шылтырап ҡуйыуы бар, ә балалы өйҙөң шатлығынан башҡа проблемалары ла йыш килеп сыға. Телевизорҙы асһаң, йә компьютерыңды тоҡандырһаң, әллә ниндәй катаклизмдар, техник һәм тәбиғи катастрофалар, авариялар һәм башҡа ошондай алама хәбәрҙәр кәйефте ҡыра. Ғөмүмән, йәшәйештә бер кем дә стрестан ҡотола алмай. Ә кеше организмының, психикаһының ошо ауырлыҡтарға ҡаршы тороу көсө сикләнгән. Нервыларың ҡаҡшаһа, йә депрессия, йә агрессия башлана - береһе икенсеһенән яманыраҡ. Стрестан нисек ҡотолорға һуң?**

Ҡайһы бер психологтар, әгәр оло кеше үҙен балаларса ҡыланырға, үҙен улар кеүек тоторға ғәмәли рәүештә өйрәнһә, стрестың зарарлы эҙемтәләренән ҡотола ала, тип иҫәпләй. Иғтибар итһәгеҙ, балалар уйындары тауышһыҙ, ҡысҡырышһыҙ булмай. Уларҙың эске эмоциялары шулай тышҡа бәреп сыға. Ошо хаҡта уйланып йөрөп, психотерапевт Артур Янов уҙған быуаттың 70-се йылдарында стресс йөҙәткән кешеләрҙе махсус рәүештә башҡарылған ҡысҡырыу алымы менән дауалай башлай. Уның ике күренекле пациенты - Джон Леннон һәм Йоко Оно була, шуға күрә был психотерапия алымы бар донъяға тарала. Доктор Янов ҡысҡырыуҙы тәү тормош заманынан ҡалған эмоциональ ғәмәл тип иҫәпләп, уны ҡулланғанда кешенең яңынан балалыҡ осорона ҡайтыуы һәм һөҙөмтәлә уның психикаһында баҫылып ятҡан травмаларҙың "юйылыу" мөмкинлеге хаҡында яҙа.

Икенсе бер ғалимә, Бирмингем ҡалаһы университетының психология буйынса өлкән уҡытыусыһы, доктор Ребекка Семменс-Уилер бына нимә ти: "Нәфрәт - кешенең база эмоцияһы, ә ярһыу - нәфрәт эмоцияһының физик агрессиялағы һәм көс ҡулланыуҙағы сағылышы". Йәмғиәттә нәфрәт тойғоһона кире баһа бирелә, сөнки ул насар эҙемтәләргә килтерә. Нәфрәт бер кемгә лә оҡшамай, әммә уның организмға файҙаһы ла бар икән: кеше организмы хәүефле мәл кисергәндә ярһыу "һуғышырға йә ҡасырға" тигән реакцияға сигнал бирә. Ә бына ҡәҙимге, ныҡ итеп, ярһып ҡысҡырған саҡта кеше шул уҡ нәфрәт тойғоһон кисерә, унан һуң бушанып, тынысланып китә. Күрәһең, ярһыған, ҡысҡырған ваҡытта кеше организмында допамин тибындағы эндорфиндар бүленеп сыға, һөҙөмтәлә улар кәйефте күтәрә ала.

"Дерби университетында уҙғарылған ҡайһы бер тикшеренеүҙәр ныҡ итеп ҡысҡырған саҡта физик ауыртыу тойғоһо кәмегәнен асыҡланы", - ти Семменс-Уилер. Ошо һәм башҡа тикшеренеүҙәр нигеҙендә ҡайһы бер илдәрҙә психотерапия ярҙамы күрһәтеү маҡсатында "Ярһыу һәм ҡысҡырыу" клубтары булдырылған.

Психотерапевтар кеше ҡысҡырыу терапияһы менән үҙаллы ла шөғөлләнә ала, тип билдәрә. Әммә бының өсөн билдәле бер шарттарҙың үтәлеүе мөһим. Бындай терапияның алгоритмы ошолай:

- Яҡын-тирәлә бер кемдең дә булмауы фарыз. Парҡка, урманға, дачаға барып шөғөлләнергә була.
- Максималь кимәлдә тынысланырға кәрәк. Һәр кемдең психикаһында "ҡыҫҡыстар" бар, улар кеше башҡарырға теләгән ғәмәлдәрҙе тотҡарлап тора. Эмбрион позаһын алып, эске көсөргәнештән тулыһынса азат булыу тәҡдим ителә. Тын алышы яй һәм тәрән булырға тейеш. Ошолай итеп тынысланып, организмды, психиканы бимазалаған халәттән сығып була.
- Тороп баҫҡан көйө, күҙҙәрҙе йомоп, үҙеңде ҡаҡшатҡан проблемаларҙы яңынан кисереп, тойоп ҡарарға кәрәк. Барса яман нәмәләрҙе бер виртуаль "сүп өйөмө"нә ташлау фарыз.
- Үҙегеҙҙе әҙер итеп тойһағыҙ, бар көскә бер нисә тапҡыр ҡысҡырығыҙ. Нисек килеп сыға, нисек теләйһегеҙ, шулай ҡысҡырырға, йыртҡыс йәнлектәй ырылдарға, олорға ла була. Әммә саманан тыш арттырып ебәрергә ярамай, йыш-йыш тын ала башлаһағыҙ, йә иһә кинәт арып китһәгеҙ, теләгегеҙ бөтһә, ҡысҡырыуҙы туҡтатырға кәрәк. Әгәр теләйһегеҙ икән, ошо циклды бер аҙ ял иткәс, яңынан башларға була. Ҡысҡырған ваҡытта таяҡ менән нимәгәләр һуғырға, төрлө хәрәкәттәр эшләргә, һикерергә лә рөхсәт ителә.
- Һуңғы этапта яңынан тынысланыу фарыз. Ултырып йә иһә ятып торорға, мускулдарға йомшаҡ ҡына массаж эшләргә, иркен һәм тыныс ҡына тын алырға тәҡдим ителә. Күҙҙәрҙе йомоп, тәбиғәт күренештәрен күҙ алдына килтерергә, тормоштағы күңелле мәлдәрҙе иҫкә төшөрөргә кәрәк. Медитация техникаһын белһәгеҙ, уның ярҙамында тынысланыу тиҙерәк һәм файҙалыраҡ булыр.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# СПОРТ МЕНӘН ШӨҒӨЛЛӘНӘЙЕК!



**Бер нисә йыл элек спорт тураһында бик күп кинолар ҡарарға тура килде. Спорт - ул тулы һәм бәхетле йәшәүгә илтеүсе юл. Беҙгә тәнебеҙ аманат итеп бирелгән. Шуға күрә беҙ тәнебеҙҙе таҙалыҡта һәм һау торорға бурыслыбыҙ. Һәм, әлбиттә, бының өсөн спорт менән шөғөлләнеү мөһим.**

Тарихтан мәғлүм булыуынса, боронғо Греция изгеләре төрлө спорт менән шөғөлләнеүселәр ҡиәфәтендә һүрәтләнгән. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадында ла спортҡа тура бәйләнеш ярылып ята. Йүгерек батыр, Тау батыр һ.б. Донъя кимәлендә тиңе булмаған эпосыбыҙ Урал батыр исемен йөрөтә. Ә инде тарихта яҡты эҙ ҡалдырған батырҙарыбыҙ һанап бөткөһөҙ. Батырһыҙ ил булмай. Үҙ өҫтөндә даими рәүештә эшләп, физик күнекмәләр менән етди шөғөлләнеп, көскә һәм камиллыҡҡа эйә булырға мөмкин. Йәғни, батыр менән спорт төшөнсәһе һәр ваҡыт йәнәшә йөрөй. Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух.

Ауылдарҙа бөтөн уңайлыҡтары булған, физик күнекмәләр үткәреү өсөн юғары кимәлдә йыһазландырылған спорт залдары һәм стадиондары бар. Тимәк, ауылыбыҙҙа сәләмәт тормош алып барыуға, йәғни спортҡа йөҙ бороу - көн талабы. Барыһы ла үҙебеҙҙән тора. Киләһе быуыныбыҙ сәләмәт тормош алып барһын, ауылыбыҙ сәскә атһын, тиһәк, тыуған ауылыбыҙҙың уртаһында бөгөнгө фән һәм техника үҫешенә таянып эшләнгән, бөтә уңайлыҡтары булған, донъя кимәлендәге спорт комплексы балҡып торорға тейеш. Был изге уй һәр беребеҙҙең аңына барып етеп, дәртен уятһа, Аллаһы Тәғәлә юлдарын асасаҡ. Ҡырмыҫҡа иләүендәй дәррәү һәм ихлас хәрәкәт итһәк, йәшәйешебеҙгә йәм, киләсәккә яҡты өмөттәр уятып, ауылыбыҙ уртаһында спорт һарайы балҡып торасаҡ.

**Айҙар КҮСӘЕВ.**

ИҪКӘРТЕҮ

## ҺЫУ ИНЕҮ ҠЫСЫНМАҺЫ

**Әүҙем рәүештә һыу инеү осоро. Әммә ял ләззәтен боҙа торған хәлдәр ҙә осрап тора, үкенескә. Мәҫәлән, һуңғы осорҙа Талкаҫ күлендә һыу инеүселәрҙең тәненә төрлө сабыртма сығыу осраҡтары йышайҙы, тип хәбәр итәләр Баймаҡ районынан. Быға нимә сәбәпсе һуң? Баймаҡ үҙәк ҡала дауаханаһының баш табибы Илшат РЫҪҠУЖИН был хәлгә аңлатма һәм кәңәштәр бирә.**

- Ҡайһы саҡ һыу инеүселәр халыҡ телендә "һыу инеү ҡысынмаһы" тип йөрөтөлгән сиргә дусар булыуы ихтимал. Был һыу ҡоштары гельминттарының ҡарышлауыҡтары (церкарийҙар) аша йоғоусы паразитар ауырыу. Церкарийҙар, ғәҙәттә, өйрәк-ҡаҙҙар, аҡкоштар йөҙгән һыуҙа йәшәй. Был сир билдәләренең береһе - церкарий менән зарарланғандан һуң 15-20 минут үткәс тә тәндең түҙеп торғоһоҙ ҡысытыуы. Паразит эләккән урында тире ҡыҙара, шешмәкләнә, ҡаты һәм ал төҫтәге сабыртмалар барлыҡҡа килә. Ә инде бер аҙҙан һуң уларҙың өҫтөндә үтә күренмәле күпертке һәм күберсектәр хасил була һәм улар ауырттыра, ҡысыта. Был хәлдә иң мөһиме тәнде тырнамаҫҡа кәрәк, сөнки тирегә инфекция эләгеүе мөмкин. Тиҙерәк табип-дерматологҡа мөрәжәғәт итеү хәйерле.

Церкариоздан һаҡланыу өсөн түбәндәге ҡағиҙәләрҙе үтәргә кәрәк:

- махсус тәғәйенләнгән урындарҙа ғына һыу инергә;
- һыу ингәндә йә балыҡ тотҡанда үҫентеләр менән ҡапланған һай урындарҙан ситтә йөрөргә кәрәк, сөнки тап ана шундай һыу биләмәләрендә ҡарышлауыҡ таратыусы моллюскылар йәшәй ҙә инде;
- әгәр ҙә ошондай урында белмәйенсәрәк һыу ингән булһағыҙ, шунда уҡ һыуҙан сығып, тәнегеҙҙе ҡаты таҫтамал менән ышҡып һөртөгөҙ һәм еүеш кейемегеҙҙе алыштырығыҙ;
- өйрәк-ҡаҙ йөҙгән һыуҙы көнкүрештә файҙаланырға ярамай;
- яр буйҙарындағы һай һыуҙа йә еүеш үләнле ерҙә яланаяҡ һыу кисеп йөрөһәгеҙ, аяҡтарҙы 2-3 минут һайын һөртөп торорға кәңәш ителә.

## СЕРӘКӘЙ КЕМДӘРҘЕ ЯРАТА?

**Табип-дерматолог Александра Филева ни өсөн ҡайһы бер кешеләрҙе серәкәйҙең нығыраҡ "яратыуы" сәбәптәрен һөйләне.**

Асыҡланыуынса, ҡанэскес был бөжәктәр ҡаны беренсе төркөмгә ҡараған кешеләрҙе өҫтөнөрәк күрә икән. Йәғни, кешеләрҙең 20 процентҡа яҡыны серәкәйҙәр ҡорбаны булып тора. Ләкин күп кенә тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе ҡан сифатының серәкәйҙәрҙе йәлеп итеүсе берҙән-бер күрһәткес түгеллеген асыҡланы. "Инә бөжәктәр кеше ҡанын берҙән-бер маҡсат - үрсеү йәһәтенән һура икән. Кеше тәнен тешләп, улар үҙҙәре өсөн ҡиммәтле аҡһым ала һәм был уларға йомортҡалар һалырға булышлыҡ итә. Тәбиғәт, әлбиттә, серәкәйҙәргә аҙыҡ табыу юлдарын да ҡарап ҡуйған: мыйыҡтары осондағы һиҙеү рецепторҙары ярҙамында улар төрлө еҫтәргә бик һиҙгерҙәр. Улар, мәҫәлән, ҡайһы бер кешеләрҙең генетик үҙенсәлектәре арҡаһында шайыҡ һәм тир составына эләгеүсе секреттарға тартылыусан була. Был уларҙың шәрбәт яратҡан төрҙәренә ваниль еҫе кеүек тойола. Башҡа тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, серәкәйҙәрҙе үҙенсәлекле тир еҫе лә йәлеп итә. Ә кеше тиренең еҫе төрлө сәбәптәргә, шул иҫәптән, тән тиреһендәге бактериялар һәм микроорганизмдарға ла бәйле. Ғалимдар күҙәтеүенсә, берәүҙәрҙең микробиотаһын серәкәй ҙә башҡаларҙыҡына ҡарағанда өҫтөнөрәк күрә. Бынан тыш, улар шәкәр диабеты сирле кешеләрҙән бүленеп сығыусы аммиак, ацетон һәм кетондар еҫенә ныҡ ылығыусан. Инә серәкәйҙәр, ғәҙәттә, яҡындараҡ йөрөгән кешеләрҙе уларҙан әүҙем бүленеп сығыусы углекислый газ арҡаһында килеп табалар.

Табип әйтеүенсә, серәкәйҙәр ҡанында алкоголь булған кешеләрҙе күберәк тешләй. Бының сәбәбе әлегә билдәһеҙ, ләкин әлеге лә баяғы тир еҫе сәбәпсе булыуы ихтимал. Урманда йөрөргә яратыусылар һүҙҙәренсә, аҡ төҫтәге кейемле кешеләрҙе серәкәй һирәк тешләй. Ә бына ҡара һәм ҡара-йәшел төҫтәге москит селтәренә был бөжәктәр күпләп ҡуна икән.

Ләйсән ЗАКИРОВА.

УЯН, УЙЛАН...

# ҮҘ АҠСАҢА...

## үҙ үлемеңде һатып алаһың



**Һыра - йәмғиәтебеҙҙе торған һайын һәләкәткә илтеүсе, уны бөтөнләй юғалтыуға алып барыусы ҡот осҡос ҡорал икәнен беләһегеҙме? Белмәһәгеҙ, уҡығыҙ түбәндәге юлдарҙы.**

### Ирҙәрҙе импотенция ҡурҡытамы?

- Һырала булған ҡатын-ҡыҙҙар енси гормондары ирҙәрҙе "енси ялҡауҙарға" әйләндерә. Һыраның тыуған иле Чехияла электән йәшәп килгән мәҡәл шундай: "Һыра эсеүсе ир ҡарбузға оҡшаған - уның эсе ҡарбуз хәтле, ә ҡойроғо ҡороған", - ти.
- Ваҡыт үтеү менән был ихтыярһыҙ, апатияға бирелеүсән әҙәм, бары тик диванда ҡырын ятып телевизор ҡарай алырлыҡ ҡына затҡа әйләнә. Артабан унда ҡуҙғыусанлыҡ һәм ярһыусанлыҡ барлыҡҡа килеүе мөмкин.
- Был заттың кәүҙә төҙөлөшө лә үҙгәрә - янбашы ҙурая, май биҙҙәре, ҡатын-ҡыҙ тибына яраҡлашып, янбашына йыйыла башлай. Эс мускулдары көсһөҙләнә һәм "һыра ҡорһағы" барлыҡҡа килә. Күпләп май йыйған күкрәк биҙҙәре ҙурая, ә ҡайһы саҡта унан хатта һөт тә бүленеп сығыуы бар.

### Ҡатын-ҡыҙҙарҙы түлһеҙлек борсоймо?

- Һыра эскән ҡатын-ҡыҙ айырыуса ярһыуға әйләнә. Уларҙың тауышы ҡалыная, "һыра мыйығы" ла барлыҡҡа килеүе мөмкин.
- Шулай уҡ һыра күкрәк биҙе, йыуан эсәк, тура эсәк яман шештәре, енси ағзалар ауырыуы, йөрәктең һимереүе, арҡа һөйәге эшмәкәрлегенең боҙолоуы, бауыр циррозы, бауыр шешеүе, ашҡаҙан сире, күреү һәм ишетеү һәләтен юғалтыу кеүек ауырыуҙарҙы барлыҡҡа килтереүсе булып тора.
- Алкоголдең һәр дозаһы - мейе күҙәнәктәренең күпләп үлеүенә килтерә.
- Һыраны бер уртлау - организмдағы биологик һәм психик билдәләрҙең зәғифләнә барыуына, тоҡом боҙолоуға алып бара.
- Һыраны күберәк һәм йышыраҡ эскән һайын буласаҡ атаәсәнән киләсәктә һау һәм аҡыллы балалар тыуыуына мөмкинлек кәмей.
- Һыраның маҡсаты - күпләп ҡырыу, һәм быларҙың барыһы ла кешенең үҙ аҡсаһына эшләнә. Ҡорбан үҙенең юҡ ителеүе өсөн үҙе түләй!

ЙӘШЕЛ ДАУА

## УҪАҠ



Уҫаҡтың (осина) кеше организмына файҙаһын һанап бөтөрлөк түгел. Бер яҡтан, уҫаҡ кешегә матди яҡтан ҙур ярҙам килтерһә, икенсе яҡтан, ул халыҡ медицинаһында иң ҡиммәтле дарыуҙарҙан һанала. Был ағас бөрөһөнән эшләнгән төнәтмә һыуыҡ үткәндән файҙалы, биҙгәк, пневмония һәм үпкәләр туберкулезынан ярҙам итә. Ошо уҡ төнәтмә менән цистит һәм башҡа бәүел ҡыуығы, бөйөр ауырыуҙарын дауалайҙар. Йәш ботаҡтарынан яһалған спиртлы төнәтмәне нейроревматизм булғанда ҡабул итәләр. Уҫаҡ бөрөһөнән ошондай төнәтмә яһарға мөмкин: ярты банка бөрө һалырға, тултырғансы араҡы ҡойорға. Төнәтмәне бер ай ҡараңғы урында тоторға.

**Ололарҙа бәүел ҡыуығы тотмау, подагра, ревматизм булғанда ошондай рецепт:** көнөнә 3 тапҡыр бер стакан һыу менән 25-30 тамсы төнәтмә ҡабул итергә.

**Мигрень.** Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан бер сәғәт алда ошо төнәтмәнән бер балғалаҡ эсеү ярҙам итә.

**Мастопатия.** 2 литр һыуға 600 г уҫаҡ ҡабығы һалып, һүрән утта 2 сәғәт ҡайнатырға. Һыуытҡансы төнәтергә, һарҡытырға. Төнәтмәгә 0,5 л араҡы ҡойорға. Килеп сыҡҡан ҡушылманы 20 өлөшкә бүлергә. 20 көн рәттән ашарҙан ярты сәғәт алда ҡабул итергә.

**Нефрит.** Уҫаҡтың ботағын, япраҡтарын һәм ҡабығын 1 стакан һыуға һалып, төнәтмә яһарға. 10 минут ҡайнатырға. Көнөнә 3-5 тапҡыр ярты стакан ҡабул итергә. 3-4 аҙнанан 10 көнгә тәнәфес яһарға, әгәр кәрәк булһа, курсты дауам итергә.

**Панкреатит.** 0,5 литр һалҡын һыуға 3 ҡалаҡ уҫаҡ ҡабығы һалып, 10 минут бешерергә. Һыуытҡансы төнәтергә, һарҡытырға. Көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә. Ошо уҡ ысул диабеттан да ярҙам итә.

Рим ӘХМӘДОВ.

Ә ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?

### Ашҡаҙан

Кемдең үҙ хужалығында тауыҡтары бар, улар йомортҡа менән ашҡаҙандың сей яраһын дауалай ала. 1 ҡалаҡ алоэ һуты, 1 балғалаҡ шәкәр ҡомо, 25-30 гр аҡ май, 1 балғалаҡ какао һәм яңы ғына һалынған йомортҡаны (бик булмаһа, кисәңгеһе лә ярай) һытып, барыһын да һәйбәтләп болғатығыҙ. Был ҡатнашманы ас ҡарынға эсегеҙ һәм бер сәғәт бер нәмә лә ашамай торoғоҙ. Хәл яҡшырғансы көн һайын иртән ҡабатларға. Ғәҙәттә 1 курс 12-14 көн дауам итә. Был ваҡытта ҡаты диета тоторға, иҫерткес эсемлектәр ҡулланмаҫҡа, тәмәке тартмаҫҡа, сөнки никотин сей яраны ҡуҙғытып тик тора, йүнәлергә бирмәй.

### Ҡорошҡаҡ

Аяҡты ҡорошҡаҡ (судороги в ногах) тотоу йышайһа, ҡан тамырҙары насарайып, күгәреп торған урындар барлыҡҡа килһә, етмәһә, аяҡтар тиҙ арый башлаһа, күберәк йәшел үләндәр, ҡабаҡ, һоло бутҡаһы, һоло ҡайнатылған һыу, шыйыҡ итеп бешерелгән йомортҡа, самалап сәтләүек, зәйтүн емеше, арпа оно ҡушып бешерелгән икмәк, ҡара емеш ашарға кәрәк. Ошо рәүешле диетала ултырһағыҙ, ике аҙнанан ҡорошҡаҡ тотоу бөтә, ә өс аҙнанан ауырыуҙың эҙе лә ҡалмаҫ.

### Юғары ҡан баҫымы

Юғары ҡан баҫымын нормалләштереү өсөн табип ҡушҡан дарыуҙарҙы ҡабул иткән саҡта һәм дарыуҙарҙы эсеп бөткәс, ауырыу ҡабатланмаһын өсөн: 2 лимонды бик ваҡ итеп турап, 1,5 стакан шәкәр ҡомо менән болғатырға һәм 6 тәүлек тоторға. Был дауаны ашағандан һуң сәйгә ҡушып эсеп торорға. Беренсеһе бөтмәҫ элек тағы 2 лимонды шәкәр менән болғатырға һәм 6 тәүлеккә ултыртып тоторға. Өс тапҡыр шулай ҡабатлағас, сәйҙе лимон менән эсеүгә күсергә.

✓ *Әүәлге ҡарлуғас ҡанатылай ҡыйғас ҡаштары пеләшкә ҡалып, бөтөнләйгә ҡойолоп бөткәнгәмелер, урынына яҫы һәм килешһеҙ итеп йөҙөнә тап килмәгән ҡара һоронан яһалма ҡаш әтмәләгәндәр.*



## *УЙМАҠ ХИКӘЙӘЛӘР*

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*



### ТАБЫН

Амбулаторияла эшләгән осорҙа, яҙғы һыу-һүл осоронда, Гөлфәйшә ҡарсыҡҡа йөрөп укол ҡаҙаным. Үҙе лә килә ала инде ул, мәгәр ҡарт кешене бер ауыл осонан икенсеһенә йүгертеп йонсотҡом килмәне. Эш аҙағында бер аяғым бында, икенсеһе - тегендә, тиҙ арала аша-төшә баҫып бара ла әйләнәм.

Аҙнанан ашыу йөрөнөм шулай, тәғәйенләгән дауаларым килешкәндер, инәйем дә күҙгә күренеп теремекләнде. Һуңғы уколды ҡаҙарға тип барғанда ул, рәхмәт йөҙөнәндер, бәләкәй генә табын әҙерләгәйне, хәстәрләгәйне, бар һыйын күргәҙмәгә ҡуйғандай итеп теҙгән, түрҙә ҡорһаҡ тирәһе йәмшәйеп бөткән еҙ самауыр борхоп ҡайнай, ыҡсым өҫтәлгә ни генә ҡуймаған: яңы айыртылған ҡаймаҡ, ватылған йомарсыҡ һыйыр майы, муйыллы ҡорот, майланған сейә, майланған бөрләгән, еләк, ҡарағат ҡаҡтары, ҡурай еләге ҡайнатмаһы, талҡан, ҡомалаҡ икмәге, сөсө ҡымыҙ, бәтәү картуф, һыуҙа бешерелгән йомортҡа...

Иҫәпләй китһәң осо-башына сығырлыҡ түгел, хатта ки төрөк солтаны, Бөйөк Британия королеваһы бындай һығылып торған һыйҙы һис ҡасан татып ҡарамағандыр, тәштәрендә генә күреп, ауыҙ һыуҙары ҡороп ымһынмаһалар, ысынлап әйтәм! Инәйем дә мәртәбәле ҡунаҡ ҡаршылағандай ҡыланып, тилбер йүгергеләй. Аштан оло булыу килешмәгән эш, бындай ҙа балыуан ризыҡтан баш тартыу гонаһ ғәмәл, шуға ҡыҫтатмай ғына түргә үтеп ултырҙым. Ҡаршымдан урын алған хужабикә ҡырҡ ҡоршау сөйнүгенә услап һинд сәйен һалып ебәрҙе лә бер сите китек сынаяҡҡа яһалған ҡуян ҡанылай ҡайнар, ҡыҙыл сәйҙе алдыма ҡуйып, ауыҙ итеп ҡара, тип, унныһын-быныһын шылдырып, тәҡдим итә башланы. Бер аҙҙан бер нигә ҡағылмай сәй һөрпөлдәтеүемә иғтибар иткән ҡарсыҡ үртәлгәндәй итеп ҡаҡ һөйәк усын маңлайына сәпелдәтте:

- Алйығанмындыр, күрәһең, күрмәйем шыпа, балам, әйтһәң ни була, алдымда ҡабыр ҡорамал һалмағаныһ тип! Мә, минеке менән аша улайһа! - Ул шулай тине лә балғалағын эсле-тышлы ялап алып, уны мул итәген ҡайырып ентекләп ҡоротоп, миңә һондо. Мин дә үҙ сиратымда барғалаҡты ихласлап ауыҙыма ҡабып һурып алдым да алдымдағы ашамлыҡтарға үрелдем.

Гөлфәйшә ҡарсыҡ ирәбе, һыйсыл, ауыҙындағы һуңғы телемен өҙөп бирергә әҙер йомарт кеше ине! Шул таҙанан таҙа балғалаҡ, инәйҙең бешергән тәмтомо һаман да телем осонда!

### ТАНЫТЫУ

Сибай медицина училищеһында уҡып йөрөгәндә шәфҡәт туташтары төркөмөнә Бөрйән районының төпкөл ауылынан бер ҡыҙ килгәйне. Зөләйха. Һүҙ ҙә юҡ, күркәм яңғырашлы, күңелгә лә, телгә лә, йәнгә лә ятышлы исем, әммә ул үҙен Зоя, тип атауҙы ҡырҡа талап итте, йүнле исемен йүнһеҙ есемгә тап килтерергә теләпмәлер, шоморт ҡара, биленә ҡәҙәр төшкән сәстәрен киҫтереп ырғытты башта, шунан мөнтәгәнен водород перекисы менән ағартып, ҡыҙыл-ерән төҫкә бояп йөрөнө гелән. Бит-йөҙөн күк-талаҡҡа, эт алғыһыҙға ҡалдырып, аллы-гөллө итеп кремдар, пудра-помадалар, ҡаралы-ҡыҙыллы биҙәнеү ҡәләмдәре менән һыйпапһылап буяһа ла үтә һылыу ине, суҡынмыш. Һылыу тип кенә әйтеү аҙҙыр, һыуһыҙ ҡалаҡҡа һалып йөтөрлөк, яңы сәскә атырға тумаланған нәфис гөлдәй гүзәл зат ине ул; талсыбыҡтай һығылмалы нескә буй-һын тиһеңме, шыма итеп юнылған аҡ мәрмәр таштай ылыҡтырғыс йөҙ тиһеңме, нәҙекәй бил, тығыҙ, йомороса й түштәр, ҡалҡыу оса, тумалаҡ балтырҙар - барыһы ла нәҡ урынында. Артыҡ та түгел, кәм дә түгел матурлыҡ, гүзәллек өлгөһө - фотомодель, беҙҙең телдә әйткәндә, саф фәрештә һынынан ижади әүәләнгән алиһә. Бөләңгерт энерҙә, ҡара төндә осҡон сәсеп, тирә-йүнде яҡтыртҡан ылыҡтырғыс нурлы күҙҙәре генә ни тора ине уның!

Һушым китеп, ауыҙ һыуым ҡороп һүрәтләнәм дә, бары ситтән генә ҡарап һоҡлана инем тегенә. Алиһә, тинем дә инде, ә ундайҙарға һаҡһыҙ оронорға, урынһыҙ тейергә, осраҡлы ҡағылырға һис тә ярамай! Тотош училище егеттәре, йәш, өйләнмәгән уҡытыусылар, шул иҫәптән мин фәҡиреңеҙ ҙә йөн атып яратып, йәшерен һөйөү йөрөтә инек Зояға ҡарата, яуапһыҙ, тамсы ла өмөт ҡалмаған, сағылмаған һөйөү. Тик ни сәбәптәндер ҡыҙ беребеҙгә лә ҡарамаһы, иғтибар итмәне, яҡты йөҙ, яңғай мөнәсәбәт күрһәтмәне, йүгән кейергә, тәртәгә тығылырға теләмәгән ҡырағай байталдай, яҡын тирәһенә юлатманы, яҡынлатманы ла. Хатта ки, шуныһы аҡыл-зиһен кимәленә һыйғыһыҙ гәжәп, һомғол, һоҡланғыс ҡарағайҙай буй-һынлы, мөләйем, ылыҡтырғыс йөҙлө, хыялый фиғелле, шиғри күңелле минә ҡарата ла итәғәтлек күрһәтмәне, мөрхәтһенмәне, остоҡай-һайлансыҡ.

Кем кәрәк булғандыр инде уға, аҡ толпарға атланған принцмы, әллә балда-майҙа йөҙгән хан улымы, әллә хөкөмдар батшаның үҙеме, этем генә белһен. Ятаҡҡа килеп йөрөгән егете лә булманы шикелле, булған хәлдә һис шикһеҙ бер күрмәгән осраҡта икенселәй яҙа ҡарамаҫ, бер һиҙмәгән хәлдә икенселәй тапҡыр тойомлар инек, моғайын. Абайлар инек тә, атаҡтағы көнсөл-ғашиҡтарҙы йыйып-туплап алып, ят, һөйкөмһеҙ әҙәмде, башҡа беҙҙең тарафҡа килеп юлыҡмаҫлыҡ итеп бәргесләп, һыу эскеһеҙ торошҡа килтереп ҡайтарыр инек, билләһи. Тәхеткә ҡунаҡлаған аҡһөйәк батшабикәләй ғорур, текә, эргәһенә яҡынлай алмаҫлыҡ, өшәндергес һалҡынлыҡ бөрккән боҙ ҡаялай ҡалды Зөләйха-Зоябыҙ.

Уҡыуҙы тамамлағас Башҡортостан райондарындағы дауаханаларға таралып юҡҡа сыҡтыҡ. Апаруҡ йылдар үткәс, бер нисәүһен осраттым осратыуға. Мәрхәмәтһеҙ йылдар шауҡымы ни ҡуйһын, олоғайғандар, танымаҫлыҡ булып үҙгәргәндәр, бирешкәндәр ине һабаҡташтарым.

Яңыраҡ теге ҡыҙҙың исем-фамилияһын теш поликлиникаһының ҡабул итеүсе табиптар исемлегендә уҡып тертләп киттем. Әүәлге фамилияһында ҡалғайны ул, әллә һаман да тормошта түгел, әллә инде икенсе сәбәп, аҙмыштан уҙмыш юҡ, тигәндәре шулдыр. Фәҡәт уға ғына тип, кисекмәҫтән ҡабул итеүгә яҙылдым.

Инеүемә, стоматология аппаратының янындағы креслола эркет гәбөһөләй рәбәғәтһеҙ, һалпыш, йәйенке кәүҙәле ҡатын ултыра ине. Ерән буяу ағылған йоҡа, һирәк сәстәренең араһынан һиҙатланып сал күренә, биттәре селлә ипкенендә һөйәк төшөнә кибеп йәбешкән өрөк емешеләй йыйырсыҡлы, сырыш, муйын тиреләре эсендәге бойҙайы ыртылаш бушаған ямаулы киндер тоҡтай һалынып күренәләр. Әүәлге ҡарлуғас ҡанатылай ҡыйғас ҡаштары пеләшкә ҡалып, бөтөнләйгә ҡойолоп бөткәнгәмелер, урынына яҫы һәм килешһеҙ итеп йөҙөнә тап килмәгән ҡара һоронан яһалма ҡаш әтмәләгәндәр. Улар күрмәлекһеҙ сырайҙы йәмләмәй, киреһенсә, былай ҙа ҡурҡыныс йөҙҙө өркөткөс-һипһендергес итеп күрһәтәләр. Ҡалын һөйәк тирәсле күҙлек эсендәге төҫһөҙ күҙҙәр көлгә күмелгән, былт-былт итеп бына-бына ҡуҡа сығырға әҙер күмерҙәй һүнгәндәр, шуға улар тереме, әллә туҙан баҫҡан быяла ярсығынан ҡоршалғандармы, тип уйларға, шиккә ҡалдырырға мөмкин. Зиһенемә көсәндереп, алдымдағы ҡатынға тағы ла бер тапҡыр һирпелдем; яңылышмағанмын, тап үҙе, тик уны яҙмыш елдәре һуҡҡылап-ҡаҡҡылап танымаҫлыҡ кимәлдә ҡартайтҡайны, бәлйерәткәйне. Ҡабул итеүҙән һуң сығырға йыйынып, ишек тотҡаһына үрелдем дә, һуңғы сиктә үҙемде танытырға йөрьәт иттем:

- Ғәфү итегеҙ, берүк, хәтерегеҙҙәме ҡаланың беренсе участкаһындағы медицина училищеһы? Беренсе булмә...

- Беренсе бүлмә, тинегеҙме? - Һорау ҡабатланды. - Беренсе бүлмәлә йәшәнем, беренсе партала ултырҙым, гел алда, алдыңғы булырға тырыштым, тик нишләптер күрмәнеләр, иғтибар итмәнеләр. Хәҙер бына, бер үҙеммен...

- Ике йылдан ашыу бергә уҡыныҡ...

Томан, нәҫ баҫҡан быяла күҙҙәргә бер аҙ ҡыҙыҡһыныусанлыҡ сатҡылары ҡунғандай итте, әрүахтарға тартым йөҙҙө бөтөнләйгә ташлап сығып ҡасырға ынтылғандай, йыйынғандай, ыҙғырыҡта күшеккән, әрпеш турғайҙың һалпыш ҡанатын хәтерләткән яһалма ҡаштар юғарыға сөйәлдөләр.

Зөләйха-Зояның һуңғы яуабы мине һеңгәҙәтеп кенә ҡалманы, бөтөнләй тәгәрәтә һуҡты:

- Уҡыу йылдары бөтөнләй хәтерҙә ҡалмаған... Бигерәк йәш инек шул, ул саҡтағы ныҡ өлкән уҡытыусыларҙың бөтәһен иҫләп, хәтерләп бөтөү ҡайҙа, һеҙ беҙҙә ниндәй фәндән уҡытығыҙ ул?..

## *БАЛАЛАР ДОНЪЯҺЫ*

# ҺИНЕ ҠАЙҘА КҮРҘЕМ ӘЛЕ МИН!

Биш-алты йәшлек малайын етәкләп алған йәш атай сиратта тора. Сират тип сират та түгел инде ул. Уҙа барһа, унлап кеше барҙыр. Бына, исмаһам, элек була торғайны ул сират! Уның ҡырҡҡа бөгөлгән осо хатта магазиндан сығып китер ине. Иртәнсәк барып торһаң, арманһыҙ булып төшкә саҡ килеп сығылыр ине. Ә хәҙер унлап кеше торған сиратты сират тип атауы ла уңайһыҙ.

Бына ошо сиратта йәш атайға һәм уның улына күҙ һалып торам. Малайын әйтәм, бигерәк шаян. Атаһы уны саҡ тотоп тора. Ә уныһы былай тартылып, уйынсыҡ алмаҡ була, тегеләй тартылып, тәм-том электерергә самалай. Үҙегеҙ беләһегеҙ, хәҙерге замана магазиндарында улары гел ҡул һуҙмалы ғына кәштәләрҙә ята бит. Ә шулай ҙа атай ныҡ тота улын. Ҡайҙа һуҙылһа ла мәлендә кире тартып өлгөрә.

Быны ошо шуҡ малай һатыусы апай тапҡырына еткәс, шаҡ ҡатып тын ҡалды. Оҙаҡ текләп торҙо ул һатыусы апайға. Нимә булыр икән, тип беҙ ҙә, сиратта тороусыларҙы әйтәм инде, бер мәлгә өнһөҙ ҡалдыҡ. Оҙаҡ ҡына текләп торғандан һуң малай аптыраулы тауыш менән һорай ҡуйҙы.

- Һине ҡайҙа күрҙем әле мин!

Сиратта тороусылар ҙа, һатыусы апай ҙа гөж итеп көлөп ебәрҙе. Әммә малай беҙҙең көлөүгә бөтөнләйе менән иғтибар итмәне. Бер аҙ ҡаҡ иҙәнде типкеләп, аҫҡа текләп торҙо ла тағы һатыусы апайға текәлде.

- Хатта көлөүең дә таныш бит миңә!

Магазин эсен тағы күңелле көлөү тауыштары геүләтеп алды.

- Әсәһе лә уның шулай көлә! Көлгәндә сикәләре соҡорланып китә хатта!

Быны сиратта тороусыларҙың кемеһе әйткәндер инде. Аңғарып булманы. Сөнки магазин эсен тағы күңелле көлөү тауыштары сорнап алды. Әммә малай беҙҙең көлөүҙәргә иғтибар итмәне. Башын бер аҙ тызып тора бирҙе лә аптыраулы тауыш менән тағы һатыусы апайға өндәште.

- Ҡайҙа күрҙем икән мин һине!

Шул мәл атаһы улына ярҙамға килергә булды.

- Балалар баҡсаһында күрмәнең микән?

Малай һатыусы апайға текләп, бер аҙға тын ҡалды. Шунан атаһына борола төшөп, уға өндәште.

- Балалар баҡсаһында, тиһеңме? Һе. Шунда күрҙем микән?

Малай һатыусы апайға борола төштө.

- Һин ҡайһы балалар баҡсаһына йөрөнөң?

Ҡыҫҡырып көлөп ебәреүҙән үҙен саҡ тыйып ултырған һатыусы апай ауыҙын ҡаплай биреп яуаплай:

- Баҙалға.

Малай аптырай төшә.

- Баҙалға? Ул ниндәй тағы Баҙал? Ул ҡаяҡта ул?

- Ана теге яҡта (һатыусы апай билдәһеҙ яҡҡа төртөп күрһәтә).

Малай аптырай төшә.

- Һе. Мин ул яҡҡа йөрөмәнем шул.

Шул мәл сиратта торған берәү ярҙам йөҙөнән малайға ошолай өндәште.

- Исемен һорап ҡара. Исемен әйтһә, бәлки, иҫеңә төшөр.

Малай өмөтлө тауыш менән һатыусы апайға тағы текәлә.

- Ә һинең исемең нисек?

- Зөлфиә.

- Зөлфиә?

Малай башын тырнап, бер аҙға тағы уйға бата. Һәм бармаҡтарын бөгөп һанай башлай.

- Бөрсә Зөпөктә беләм. Ҡара Айгөлдө беләм. Югерек Маһмайҙы (Маһинурҙы) беләм. Ҡаты Жәләҙәкәне (Тимербикәне) беләм. Аптырайым, нисек Зөлфиәне белмәйем икән?!

Шул мәл күптән инде һатып алған нәмәләре өсөн түләп бөткән атаһы улына өндәште.

- Әйҙә, булмаһа ҡайтайыҡ, улым. Бәлки, ҡайтҡас иҫеңә төшөр.

Атаһына теләр-теләмәҫ кенә эйәреп барған малай ишек төбөнә барып еткәс, боролоп тағы өндәште.

- Ә бит мин һине барыбер ҡайҙалыр күрҙем!

Эскерһеҙ бәхетле бала саҡ, тип уйлап оҙатып ҡалды уларҙы сиратта тороусылар. Күптәргә хатта бер аҙ моңһоу ҙа булып китте, буғай. Булғанына ысын күңелдән шатланып, булмағанын бар тип тә белмәй, аңлашылмағанына бар күңел менән аптырап, әйтер һүҙенде шартлатып әйтеп йөрөгән саҡтар бер мәл генә була икән, тигән уй күптәрҙең башынан үтеп киткәндер, моғайын.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

✔ *Инанған кеше өсөн Аллаһы Тәғәлә - ул Йыһан Тәңреһенең суперкөсө, супераҡылдың кодланған иseme. Һәр кеше Хоҙайға инаныу менән донъяға килә. Кешеләрҙе тик инаныуҙың структураһы ғына айыра.*



ИНТЕРНЕТТАН



## ҺУҒАН ҠАБЫҒЫНДА...

■ Мадрид университеты ғалимдары һуғандың ҡабығында сәләмәтлек өсөн файҙалы матдәләр күплеген асыҡлаған. Һуғандың ҡабығы һәм һоро төҫтәге өҫкө ҡатламы флавоноидтарға, ә беҙ ҡырҡып ташлаған ғәҙәтләнгән аҫҡы өлөшө көкөрт берләшмәләре һәм фруктоза полимерҙарына бай. Шуға ла ғалимдар аҙыҡ әҙерләгәндә уны кверцетин көсөк фенол берләшмәләре һәм флавоноидтар менән тулыландырыу өсөн һуғандың һоро ҡатламын да ҡулланырға тәҡдим итә. Был йөрәк-ҡан тамырҙары, ашҡаҙан, эсәк яман шеше, икенсе типтағы диабет, һимереү көсөк ауырыуҙарҙы булдырмаҫҡа ярҙам итәсәк. Фенол берләшмәләренең канцероген процесҭарҙан һаҡлауы ла билдәле.

■ Кеше насар елләтелгән бүлмәлә кислород етешмәүҙән иҫнәй башлауы күптән билдәле. Шулай ҙа иҫнәү булдырыусы сәбәптәр әлегә тиклем асыҡланып бөтмәгән. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, йоҡо килгәндә, арығында баш мейеһендә тотҡарланыу процестары ярһыу процестарына ҡарағанда өҫтөнлөк ала бара. Һөҙөмтәлә, организмдың ҡайһы бер функциялары, шул иҫәптән һулыш алыу ҙа тотҡарлана. Ул һирәгерәк, өҫтөнөрәк була бара, шуға ла ҡанда углекислота һәм матдәләр алышыныуҙың башҡа продукттары йыйыла. Баш мейеһенең һулыш алыу үҙәктәренә тәьҫир итеп, улар иҫнәү тыуҙыра. Әйткәндәү, иҫнәү башҡа кешегә йоғоусан. Ул күләү кеүек үк, күршегеҙгә шунда уҡ йоғоп, ул да иҫнәй башлаясаҡ.

■ Америка психологтары белдереүенсә, кешенең лидерлыҡ һәләттәре уның буй оҙонлоғона бәйле. Бынан тыш, мәҙәниәт һәм тәрбиә кимәленә ҡарамайынса, бар кешеләр ҙә оҙон буйлыларға тиҙерәк ышана икән. Тикшереү барышында асыҡланыуынса, боронғо кешеләр башлыҡтар һәм Аллаларҙың фигураларын ябай кешеләр фигураларына ҡарағанда оҙонораҡ итеп һүрәтләгән. Студенттар араһында үткәрелгән һорау алыуҙарҙа 64 процент осраҡта лидерҙар ябай кешеләрҙән оҙонораҡ булып сыҡҡан.

■ Торонто (Канада) университеты ғалимдары белдереүенсә, сит телдәр өйрәнеү Альцгеймер ауырыуы билдәләре барлыҡҡа килеүҙән һаҡлай. Тикшереү барышында ғалимдар был ауырыуҙың беренсе билдәләре булған пациенттарға томографик тикшеренеү үткәрә. Экспериментта ҡатнашыусыларҙың барыһының да белем кимәле бер тигеҙ була, әммә уларҙың яртыһы сит телдә иркен һөйләшә, икенсе яртыһы бер ниндәй ҙә сит тел белмәй. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, сит тел белгән кешеләрҙә Альцгеймер ауырыуы билдәләре һуңыраҡ барлыҡҡа килә. Быны ғалимдар шулай аңлата: кеше бер телдә аралашыуҙан икенсеһә күсеп, даими рәүештә мейе эйҙемлеген һаҡлап ҡала. Шулай уҡ артыҡ ауырлыҡ, юғары ҡан баҫымы, диабет, депрессия, тәмәке тартыу, физик һәм аҡыл көнкүрешләре булмауы аҡыл зәғифлегенә килтерә.

■ Калифорнияның Stroma Medical ойошмаһы докторы 20 минутта күҙҙәрҙең төҫөн үҙгәртеү ысулын уйлап тапҡан. Был технология Lumineyes тигән атама алған. Уның нигеҙендә һоро күҙҙәрҙе зәңгәргә әйләндереүсе лазер ята. Лазерҙың энергияһы күҙҙәрҙең өҫкө төҫлө ҡатламынан һоро пигментты алып ташлай, һөҙөмтәлә, 2-3 аҙна эсендә унда зәңгәр төҫ тула. Процедураның бер кире ягы бар: күҙҙәрҙең элекке төҫөн ҡабат ҡайтарып булмаясаҡ.

ТАҒЫ БЕР ӘҢГӘМӘ

# "ҠӨРЬӘНДЕ ТӘРЖЕМӘЛӘРГӘ...

## 12 йыл кәрәк булды", ти В. Порохова

**Мин Көнбайыш Себерҙә эшләгән дәүерҙә, 2000 йылдың мартында, "Когалым хәбәрҙәре" гәзитендә "Валерия Порохова: "Ҡөрьәнде тәржемәләргә 12 йыл кәрәк булды" тигән баш аҫтында мәҡәлә баҫылды. Журналист Валерий Рябиков унда тәржемәсе Валерия Михайловна Порохова менән бик ҡыҙыҡлы әңгәмә ҡора. Бындайыраҡ әңгәмәләрҙең береһе 2023 йылдың апрелендә "Киске Өфө"лә лә баҫылып сыҡҡайны. "Когалым хәбәрҙәре" гәзитендәге яҙма күләме һәм эстәлеге яғынан тулыраҡ булыуы менән әһәмиәтле, тип уйланым һәм уны тәржемәләп, "Киске Өфө" уҡыусыларына тәҡдим итергә ниәтләнем.**



"Бер нисә көн элек Когалымда Рәсәй мосолмандары араһында иң популяр кеше - Валерия Михайловна Порохова ҡунаҡта булды. Ул Сталин репрессиялары йылдарында атылған урыҫ дворяны ҡыҙы. Ире - Мөхәммәт Сәйед Әл Рәшид - Дамаск университеты шәриғәт факультетын һәм Мәскәү инженер-төҙөлөш вузы аспирантураһын тамамлаған Сүриә гражданы. Уларҙың ике еткән улдары бар. Валерия Михайловна бер нисә сит ил академиялары академигы итеп һайланған, инглиз, немец, ғәрәп телендә енел аралаша. Рәсәй ҡатыны тарафынан атҡарылған Ҡөрьән тәржемәһе мәғәнәһе яғынан дөрөҫ булыуы менән уға донъяла билдәлелек килтерә. Валерия Михайловна Исламға табынған беренсе урыҫ тәржемәсеһе.

➔ **Валерия Михайловна, һеҙ күп ҡалаларҙа, илдәрҙә булғанһығыҙ, данлыҡлы кешеләр, ҙур рухани әһелдәр менән осрашҡанһығыҙ, Когалым менән сағыштырғанда нимә әйтер инегеҙ?**

- Мин туң һаҙлыҡтар араһындағы күркәм сюрпризды көтмәгән инем. Когалым мине үҙенең йөҙө менән арбаны. Бында йәшәү иҫ киткес күңелле. Минә мәктәп, балалар баҡсаһында булырға мөмкинлек бирҙеләр. Бында балаларға Мәскәүгә ҡарағанда иғтибар күберәк. Ҡаланың энергетик климаты яҡшы.

➔ **Беҙҙең гәзитте уҡыусыларыбыҙ Һеҙҙең менән яҡыныраҡ танышырға теләр ине.**

- Мәскәүҙә, ваҡыты менән Дамаскта йәшәйем. Сит телдәр институтын тамамланым, дипломды инглиз теләндә яҡланым, артабан инглиз теленең синхрон тәржемәсеһе булып эшләнем. МИФИ-ҙа уҡыттым, бер үк ваҡытта МДУ-ның фәлсәфәүи факультеты дипломына эйә булдым. Әлеге ваҡытта ирем менән икебеҙ ҙә Әл-Фурҡан үҙәгендә эшләйбеҙ. Беҙҙең төп шөғөлөбөҙ - мосолмандарҙың аң-белемен үҫтереү, Ҡөрьәнде һәм Бәйғәмбәр хәҙистәрен нәшер итеү.

➔ **Когалымлылар алдындағы бер сығышығыҙҙа билдәле кешеләрҙең Исламға күсеүе тураһында әйткәйнегеҙ: француҙ фәйләсуфы Роже Гароди, киноартист Умар Шәриф, ғалим Жан-Жак Кусто һ.б. Быны Һеҙ ҙә Исламға инанғанһығыҙ. Был нисек килеп сыҡты?**

- Кешеләрҙең күбеһе Исламға Ҡөрьәнде уҡып күсә. Ул виртуоз Яҙма, кешене арбай һәм уны үҙгәртеп үк ҡора. Минең Исламға күсеүемә мин йәшәгән мосолман мөхите һәм Изге Китаптың йоғонтоһо ҙур булды. Шулай уҡ беҙҙең бөтәбеҙҙең дә - йәһүдтәр, христиандар, мосолмандар, буддасыларҙың асылда бер үк Аллаһы Тәғәләгә ышанғанығыҙҙы аҡлау ҙур әһәмиәткә эйә булды. Инанған кеше өсөн Аллаһы Тәғәлә - ул Йыһан Тәңреһенең суперкөсө, супераҡылдың кодланған исеме. Һәр кеше Хоҙайға инаныу менән донъяға килә. Кешеләрҙе тик инаныуҙың структураһы ғына айыра. Әгәр һеҙ ерҙә Аллаһы кәүҙәләндереүсе итеп Христосты һанайһығыҙ икән - һеҙ христиан. Әгәр һеҙ ерҙә супераҡылдың булыуын инҡар итәһегеҙ, ә ергә Алла ебәргән Бәйғәмбәрҙең тәглимәтенә ышанаһығыҙ икән, тимәк, һеҙ, моғайын, мосолман. Әммә мосолмандың теләнә кеме Хоҙай ергә ебәргән Ғайса бәйғәмбәрҙең бөйөк миссияһына ышанмай икән, ул ысын мосолман тип һаналмай.

➔ **Һуң бөтә диндәр ҙә Изге Яҙмаларға нигеҙләнгән бит?**

- Шуны күҙҙә тоторға кәрәк: элек Алланың ергә ебәрелгән бәйғәмбәрҙәренең функциялары киңлек-ваҡыт, милләт һ.б. факторҙар тарафынан сикләнгән. Шунан сығып, ваҡыт үтеү менән Изге Яҙмаларҙа бәйән ителгән белемдең үтәлеше тамамланғас, улар үҙ вазифаһын тамам үтәгәс, әҙәби ҡомартҡыға әйләнгән. Бөтә васыяттарҙың (заветы) артыҡ үҫеше (гипертрофия) наҙанлыҡтан килеп сыға - кешелек донъяһы үҙенең үҫешендә юғарыраҡ кимәлгә күтәрелһә, яңы яҙма мөрәжәғәткә (послание) ихтыяж барлыҡҡа килә. Бына шулай Тәүратҡа (Тора) алмашҡа Иҫке Ғәһед (Ветхий завет), уға алмашҡа Яңы Ғәһед (Новый завет), ә уға алмашҡа Мәңгелек Ҡөрьән төшөрөлгән. Ҡөрьәндәге ғилми белем шаҡ ҡатыра. Ә күпме йәшерен асылы (кодтар) әле асылмаған!

Дамаскта ирем Ҡөрьән уҡырға тәҡдим итте, Бөйөк Китап мине шул тиклем ылыҡтырғас, мин ғәрәп телен өйрәндем һәм 12 йыл ғүмеремде уны ысын күңелдән урыҫ теленә тәржемә итеүгә һәм уға комментарийҙар төҙөүгә бағышланым.

➔ **Һәр хәлдә, төрлө диндәр йәшәүен дауам итә ...**

- Шуны аңлағыҙ, халыҡтарҙы Аллаға ышаныу айырмай, ә шул инаныуға кәрәгенән артыҡ ер структуралары өйөмө айыра. Лука Инжилында: "Ҭҙара бүлешмәгеҙ, сөнки эсендәген бүлешкәнлектән өй юҡҡа сыға",- тигән. Мин Библияны бик яратам, Тәүратты гүзәл әҫәр тип һанайым, ә Ҡөрьән буйынса йәшәргә тырышам. Шул уҡ ваҡытта Бөтә Изге яҙмалар бер ҡулдан ебәрелгән икәнен аңлайым, алда әйтелгәнсә, киңлек-ваҡыт һәм милли нескәлектәр менән. Кешеләр дөрөҫ юлға баҫһындар тип, Алла ергә бәйғәмбәрҙәр ебәргән, Хәбәр артынан Хәбәр төшөргән, ә халыҡтар шуларҙан дин эшләгән. Улай ғына ла түгел, кешеләр көлкөгә ҡалдырмаған бер генә бәйғәмбәр ҙә ҡалмаған.

➔ **Валерия Михайловна, Һеҙ Ҡөрьәнде ғәрәпсәнән тәржемәләгәндә төп нөсхәһенме, әллә башҡа тәржемәләрҙе ҡулландығыҙмы?**

- Параллель рәүештә барыһын да ҡулландым.

➔ **Рәсәйҙә Ҡөрьәндең урыҫ теленә әйләндерелгән башҡа тәржемәләре бармы?**

- Ундай 10-ға яҡын тәржемә бар. Минең тәржемә шиғри юлдар формаһында атҡарылған. Тексттың аң-аҡылын һаҡлап ҡалыу минең ирем һәм

***✓ Тәрбиә мәсьәләһен генә алғанда ла, был тәрбиә емештәрен мин ғәрәп илдәрендә бик күп күрҙем. Унда эскесе ирҙәр юҡ, тирә-яҡта идеаль таҙалыҡ, хәйерселек юҡ. Унда мосолмандарға хәйерсе булырға мөмкинлек бирмәйәсәктәр.***



Ислам ғалимдары тарафынан ентекләп тикшереү аҫтында барҙы. Беҙҙең Рәсәйҙә Г.С. Саблуков*, Д.Н. Богуславский, И.Ю. Крачковский, М.О. Османов һ.б. иң билдәлеләре һанала. Сағыштырғанда, мәҫәлән, Англияла инглиз телендә сыҡҡан Ҡөрьәндең 106 тәржемәһе бар.

**➔ Тотороҡло фекер йәшәй: Ислам - урта быуат дине, ҡатындарҙы түбәнһетә, күп бисәлеккә өгөтләй, йыһат һуғышына өндәй ...**

- Ислам белеме етмәү һәм аңламау - йәмғиәттең етди проблемаһы. Беҙҙә 26 млн Исламға бирелгән кеше һанала. Рәсәй - христиан-мосолман иле, шул уҡ ваҡытта Ислам христиан диненә ҡарағанда 150 йыл алда Рәсәйгә индерелә. Әммә халыҡтың күпселеге генә түгел, мосолмандарҙың күбеһе Исламды белмәй, наҙанлыҡта ҡала. Урта быуат мәҙәниәтле кеше, әлбиттә, Ҡөрьәндә үҙенең менталитетына тура килгәнен генә таба һәм аңлай алыр. Хәҙерге заман мәҙәниәтле кеше Ҡөрьәндә үтә юғары аң-белемде асыр. Яҙмала бөтә нәмә кодҡа һалынған һәм уларҙы уҡыу асҡысы булып һеҙҙең шәхси интеллект һәм мәҙәни кимәлегеҙ тора. Әгәр һеҙ фәнни-техник прогресҡа әҙер булһағыҙ, Ҡөрьәндә күҙалланған ғилми асыштарҙы күрерһегеҙ. Миндә билдәле Канада ғалимы - эмбриолог, медицина өлкәһендә Нобель премияһы лауреаты Кейт Мур ҡунаҡта булғайны. Ул: "Әгәр мин Ҡөрьәнде 20 йыл элек уҡыған булһам, 20 йыл элек Нобель премияһын алған булыр инем", - тине. Ҡөрьән тикшеренеү өсөн бөтмәҫ-төкәнмәҫ майҙан **.

Ислам үҙ иркең менән донъянан китеүгә ҡәтғи рәүештә ҡаршы. Ул уңайлы, матурлыҡта һәм шатлыҡта йәшәргә саҡыра. Ҡара кейем, пәрәнжә, аскетизм Исламға тура килмәй. Шәхсән мине Ислам һоҡландыра. Был диндең баһаһы нимәлә? Тәрбиә мәсьәләһен генә алғанда ла, был тәрбиә емештәрен мин ғәрәп илдәрендә бик күп күрҙем. Унда эскесе ирҙәр юҡ, тирә-яҡта идеаль таҙалыҡ, хәйерселек юҡ. Унда мосолмандарға хәйерсе булырға мөмкинлек бирмәйәсәктәр. Ҡатын-ҡыҙҙарға килгәндә, бер генә дин дә ҡатын-ҡыҙға шул тиклем киң хоҡуҡ бирмәй. Ғәрәп ҡатыны яҡшы кейенә, косметиканы дөрөҫ ҡуллана, тәрбиәле.

Даны сыҡҡан полигамияға ҡарата шулай уҡ аныҡ-тарихи күҙлектән ҡарарға кәрәк. Ҡөрьән һәр мосолманды дүрт ҡатын алырға мәжбүр итмәй. Ҡөрьәндең ҡатын-ҡыҙ тип аталған дүртенсе сүрәһе, минеңсә, мосолмандарҙың инаныу ҡағиҙәләре уставы һәм конституцияһы булып тора. Унда һуғышта ҡәбилә ирҙәренең һәләк булыуы проблемаһы ҡарала. Бындай осраҡтарҙа көн тәртибенә күп ҡатынлылыҡты законлаштырыу баҫа. Ул күпселек тол ҡалған ҡатындарға һәм егеттәрен юғалтҡан еткән ҡыҙҙарға ғаилә ҡорорға һәм бала табырға мөмкинлек бирә ***.

**➔ Валерия Михайловна, ә һеҙҙең ирегеҙҙең икенсе ҡатын алғанын күҙ алдына килтерә алаһығыҙмы?**

- Намыҫ менән әйткәндә, юҡ. Быны өсөн бер ниндәй ҙә нигеҙ, сәбәп күрмәйем. Мин ҡот осҡос ҡиәфәтле һәм аңһыҙ түгелмен, улдар тапҡанмын һәм өйөмдө арҙаҡлы кешеләр өсөн асыҡ тотам. Минеңсә, беҙ еңел аҡыл менән билдәле аятты рисәлә итеү хәлендә түгелбеҙ: икенсе, өсөнсө ҡатын алығыҙ, әммә ғәҙеллекте һаҡлау яғынан һеҙҙә ҡурҡыу тыуһа, ҡатының фәҡәт берәү булһын. Ә был планда ғәҙеллекте бер нисек тә һаҡлап булмаясағы көн кеүек асыҡ икән, ниңә тағы икенсене алырға?

Мосолман йә христиан ҡатыны булһынмы, уныһы мөһим дә түгел, уларҙың үҙенең иренең берҙән-бере булырға теләмәгәне юҡ.

**➔ Һеҙ һуғыштар, йыһат тураһында нимә әйтерһегеҙ?**

- Иҫегеҙгә төшөрәйем, Ислам һүҙе именлекте, тыныслыҡты аңлата, Ислам дине - ул тыныслыҡ дине. Дин белгесе булып "һаташҡан" мосолмандар йыһатты "изге һуғыш" тип нарыҡлай. Ә ысынында иһә андың беренсе дәрәжәһендә йыһат - ул Хоҙай юлындағы тырышлыҡ, иң алда - инаныу уставын белеү: кеше мотлаҡ һаҡларға тейеш васыяттар һәм тыйыуҙар. Йыһаттың икенсе дәрәжәһе - янында торғанға белемеңде биреү, Исламға йәлеп итеү. Ҡылыс һәм ут менән түгел, "ә аҡыллы һәм яғымлы һүҙҙәр менән Аллаға ылыҡтырығыҙ, ризаһыҙҙарҙы телмәрегеҙҙең йомшаҡлығы менән ышандырығыҙ. Әгәр ҙә улар һеҙҙе аңламаһа, "тыныслыҡ" тип әйтегеҙ ҙә янынан китегеҙ". Йыһаттың бөтә методикаһы шунда инде. Уны ҡапма-ҡаршы мәғәнәлә боҙғандар: "Теләмәйһең икән - мәжбүр итербеҙ", - тиҙәр. Ә Ҡөрьәндә апасыҡ әйтелгән: Алланың эше өсөн тик һиңә ҡаршы менән генә көрәш, мөмкин булғандың сигенән сыҡма, Алла бер ниндәй хыянатҡа түҙемлеккә юл ҡуймай. Йыһатты аңлауҙың өсөнсө дәрәжәһе - үҙеңде һаҡлау. Ҡөрьәнгә ярашлы, беренсе булып агрессия башлау мөмкин түгел, ҡәтғи тыйыла.

**➔ Валерия Михайловна, әңгәмәнең аҙағында үҙегеҙ тураһында бер нисә һүҙ. Нимә менән мауығаһығыҙ, ниндәй аҙыҡҡа өҫтөнлөк бирәһегеҙ, кешенең ниндәй сифаттарын иң алға ҡуяһығыҙ?**

- Бөтә тәмле аҙыҡты: балыҡ, еләктәрҙе, йөҙөргә, шахмат уйнарға яратам, күп уҡыйым, хәҙистәр өҫтөндә эшемде дауам итәм. Элеккесә әйткәндә, ижтимағи эштәр - лекциялар, юлда йөрөү күп ваҡытты ала. Кешеләрҙә аҡыл, унан да алда намыҫлылыҡҡа өҫтөнлөк бирәм. Ҡөрьәндә әйтелгәнсә, кем дә кем инана һәм яҡшылыҡ эшләй, Алла һис шикһеҙ уны йылғалар һуғарған Баҡсаларға индерер.

**Былары - минең өҫтәмәләр:**

* Ҡаҙан Дини академияһы профессоры, күренекле ғалим, Рәсәйҙә беренсе булып Ҡөрьәнде ғәрәп теленән тура урыҫ теленә тәржемә иткән Г.С. Саблуковтың (1759-1835) атаһы Архангел районы үҙәгендәге сиркәүҙә дин әһеле була. Сиркәү 1786 йылда төҙөлөп бөтә, ул Башҡортостандағы 220 сиркәү араһында иң олоһо.

** Беҙҙең мәшһүр ғалимыбыҙ, физика-химия һәм химик технологиялар өлкәһендәге химия фәндәре докторы Нәжип Хәтмулла улы Вәлитов (Өфө ҡалаһы 9-сы башҡорт мәктәбен һәм Нефть институтын тамамлаған) элек билдәһеҙ 6 тәбиғәт хәлен асҡан һәм 12 яңы теория уйлап тапҡан. Был яңы тәбиғәт хәлдәре кешелек донъяһында әлеге 3 Изге Китап барлыҡҡа килгәндән 1000 йылдан ашыу ваҡыт үткәс кенә асыла. Шуға күрә кешелектең рухи сығанаҡтары материяның төҙөлөшө һәм үҙенсәлеге тураһында фундаменталь ғилемдән боронғораҡ булып сыға. Быға тиклем фундаменталь ғилем диндә абруй яулай алмай ине. Нәжип ағайыбыҙҙың монографияһындағы фәндең 5 өлкәһенә таянған асыштары тәбиғәт хәлдәрен дини китаптарҙағы сығанаҡтар менән сағыштырып, уларҙың дөрөҫлөгөн иҫбат итә һәм диндарҙар араһында фәндең абруйын күтәрә. Уның монографияһы тураһында донъяның 64 илендә мәғлүмәт баҫыла, Рим Папаһы Иоанн Павел II тарафынан маҡтауға лайыҡ була һәм Тәлғәт Тажетдин хәҙрәттең хуплауына ирешә.

*** Әлегә мин ағайыбыҙҙың асыштарының береһе булған "тере" һәм "үле" һыу тураһындағыһына ғына туҡталам, сөнки был төшөнсәләр беҙҙең "Урал-батыр" эпосында ла яңғырай. Ҡөрьәндә, шулай уҡ Инжилда һәм Тәүратта әйтелгәнсә, ямғыр һыуы "үле" ерҙе һәм үҫемлектәрҙе терелтә. Нәжип ағай Изге Китаптарҙа "тере" һәм "үле" һыу бүтән исемдәрҙә нарыҡланған булыуын раҫлай. Ерҙәге хайуандарҙа һәм үҫемлектәрҙә "үле" һыу миҡдары 20-30 процент тәшкил итә, бындай һыуҙы ул "термодесорб", ҡалған 70-80 процентын "изотермодесорб" тип атай, уныһы "тере" һәм иркен һыуҙар. "Термодесорб" һыу ергә ныҡ йәбешә һәм хәрәкәтһеҙ була, ә "изотермодесорб" тигәне юғары хәрәкәтсән, ергә һәм тереклек күҙәнәктәренә йәбешмәй, тереклектә матдәләр алышыуын тәьмин итә, иркен һыу уның резервы булып тора. Ямғыр һыуы иркен һыу булараҡ, ерҙә "изотермодесорб"ҡа әйләнә һәм һөҙөмтәлә ямғырҙан һуң ер терелә, үҫемлектәр үрсей башлай. Тимәк, бының шарты: тупраҡта һыу кимәле 20-30 проценттан артһа ғына үҫеш башлана. Минең шәхсән һығымта: баҫылған "Урал-батыр" эпосы һәм тирә-яҡ мөхит" тип аталған мәҡәләмдә (Ватандаш, № 2, 2018) эпостың барлыҡҡа килеү ваҡытын иҫке эраның аҙағы (дүрт быуат) - яңы эраның башы (дүрт быуат) тип фаразлаған инем, тимәк, эпосыбыҙҙа "тере" һыу Изге Китаптарҙан да элек билдәле булған. Шулай итеп, "Урал-батыр" эпосы башҡорттоң үҙенең Изге Китабы тип һанала ала.

**Геология-минералогия фәндәре кандидаты, техник фәндәр докторы, Рәсәй Тау фәндәре академияһы академигы Эрнст ЮЛБАРИСОВ әҙерләне.**

*ФӘҺЕМ*

# БӘХЕТ ҠАНУНДАРЫ



## Аҡса һәм бәхет

Аҡса беҙгә хәүефһеҙлек һәм уңайлыҡтар бирә ала, ләкин аҡсаға бәхет һатып алып булмай. Аҡсаға беҙ карауат һатып ала алабыҙ, әммә төш түгел. Маҡтауҙар һатып ала алабыҙ, әммә ихлас дуҫтарҙы түгел. Ҡатын-ҡыҙға бүләк һатып ала алабыҙ, әммә уның һөйөүен түгел. Кисәгә билет һатып ала алабыҙ, әммә шатлыҡ түгел. Мәктәптә уҡыу өсөн аҡса түләп кенә, белемде лә һатып алып булмай.

Һин аҡсаға һатып алып булмай торғанды яуларға тейешһең - шунһыҙ, миллионер булһаң да, бәхеткә өлгәшә алмаясаҡһың...

**Аугусто КЮРИ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Өсөнсө хат: "Иң олоһо"

Йәшәйештәге иң оло маҡсат нимәлә? Тирә-яғыбыҙҙа яҡшылыҡты арттырыуҙалыр, уйлауымса. Ә яҡшылыҡ - ул тәү сиратта бар кешеләрҙең бәхете. Ул күп нәмәнән барлыҡҡа килә, һәм тормош һәр ваҡыт кеше алдына хәл итә белеү мөһим булған мәсьәлә ҡуя. Кешегә ваҡ ҡына эштә лә изгелек ҡылырға була, ниндәйҙер олоһо хаҡында ла уйланырға мөмкин, әммә ваҡ һәм олоно айырырға ярамай. Күп нәмә, әйткәнемсә, бәләкәйҙән башлана, бала саҡта һәм эргәлә тыуа.

Бала үҙ ата-әсәһен, туғандарын, ғаиләһен, өйөн ярата. Аҡрынлап киңәйә барып, уның яҡын күреү тойғоһо мәктәпкә, ауылға, ҡалаға, бөтә илгә тарала. Ә был иһә бөтөнләй оло һәм тәрән тойғо, шулай ҙа унда ғына туҡталып ҡалмаҫҡа һәм кешелә кешене яратырға кәрәк.

Патриот булырға кәрәк, ә милләтсе түгел. Үҙ ғаиләңде яратҡан өсөн бүтән ғаиләләрҙе күрә алмау зарурлығы юҡ. Һин патриот булған өсөн башҡа халыҡтарҙы күрә алмау зарурлығы ла юҡ. Патриотлыҡ һәм милләтселек араһында айырма ҙур. Тәүгеһендә - үҙ илеңә ҡарата һөйөү, икенсеһендә - бөтә башҡаларға ҡарата нәфрәт.

Яҡшылыҡтың оло маҡсаты бәләкәйҙән - яҡындарыңа яҡшылыҡ теләүҙән башлана, әммә киңәйә барып, ул киңерәк мәсьәләләрҙе үҙ эсенә ала. Был һыу өҫтөндәге түңәрәктәр кеүек. Әммә улар таралған һайын ҡеүәтһеҙләнә бара. Һөйөү һәм дуҫлыҡ иһә, киңәйә һәм күп нәмәгә тарала барып, яңы ҡеүәт ала, юғарыраҡ була, ә кеше, уларҙың үҙәге, аҡылы.

Мөхәббәт ихтыярһыҙ булырға тейеш түгел, ул аҡыллы булырға тейеш. Был мөхәббәттең ратҡан кешеңдең дә, тирә-йүндәгеләрҙең дә етешһеҙлектәрен күрә, шуларға ҡаршы көрәшә белеү менән берләшкәнлеге шарт булыуын аңлата. Ул аҡыл, зарурҙы буш һәм ялғандан айыра белеү менән дә берләшергә тейеш. Ул һуҡыр булырға тейеш түгел. Һуҡырҙарса һоҡланыу (уны хатта һөйөү тип атап та булмай), ҡот осҡос эҙемтәләргә килтереүе ихтимал. Барыһына ла һоҡланыусы һәм бөтә осраҡта ла балаһын күтәрмәләп торған әсәй әхлаҡи йәһәттән зәғиф кешене тәрбиәләп үҫтереүе бар. Германия менән һуҡырҙарса һоҡланыу ("Германия - барыһынан да өҫтөн" - шовинистик немец йыры һүҙҙәре) нацизмға килтерә, Италия алдында һуҡырҙарса һоҡланыу - фашизмға.

Тәрән аҡыл - ул изгелек менән берләшкән аҡыл. Изгелек булмаһа, аҡыл үҙе генә - хәйләкәрлек. Хәйләкәрлек иһә, яйлап ҡорой һәм иртәме-һуңмы, мотлаҡ хәйләкәрҙең үҙенә ҡаршы әүерелә. Шунлыҡтан хәйләкәрлек йәшенергә мәжбүр. Тәрән аҡыл иһә, асыҡ һәм ышаныслы була. Ул башҡаларҙы, ә тәү сиратта тәрән аҡыллы кешенең үҙен алдамай. Тәрән аҡыл кешегә яҡшы исем һәм ныҡлы, ышаныслы, оҙайлы бәхет менән бигерәк тә ҡартлыҡта иң ҡәҙерлеһе булыр тыныс намыҫ алып килә.

Мин телгә алған "Бәләкәйҙә - ҙур", " Йәшлек - мәңгелек" һәм "Иң олоһо" тигән өс фекер араһында булған уртаҡлыҡты нисек атарға һуң? Уны девиз булырлыҡ бер һүҙ менән билдәләргә була: "Тоғролоҡ". Кеше бәләкәйҙә һәм ҙурҙа таянырға тейешле оло принциптарға тоғролоҡ, тел теймәҫлек йәшлегеңә тоғролоҡ, ватаныңа, ғаиләңә, дуҫтарыңа, ҡалаңа, илеңә, халҡыңа тоғролоҡ. Ахыр сиктә тоғролоҡ ул дөрөҫлөккә - хәҡиҡәткә һәм ғәҙел дөрөҫлөккә тоғролоҡ.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 30 ИЮЛЬ - ХАЛЫҠ-АРА ДУҪЛЫҠ КӨНӨ

**Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы тарафынан 2011 йылда булдырылған Халыҡ-ара дуҫлыҡ көнө йыл һайын 30 июлдә билдәләнә. Был башланғысты ЮНЕСКО күтәреп сыға һәм 2001-2010 йылдарға иҫәпләнгән Донъя мәҙәниәте һәм планета мәнфәғәтенә золом ҡылмау халыҡ-ара ун йыллығы менән Донъя мәҙәниәте өлкәһендә декларация һәм эш программаһы нигеҙ итеп алына.**



Документтарҙа бөтә донъя буйынса йәмғиәттең һәр кимәлендә ҡылынған золомдар балаларға ҙур зыян килтереүе раҫлана. БМО дәүләт структураларына, халыҡ-ара һәм төбәк ойошмаларына был байрамды үҙ мәҙәни йолаларына таянып билдәләргә, дуҫлыҡ һәм теләктәшлеккә булышлыҡ иткән сараларҙы күтәрмәләргә тәҡдим итә. Әйткәндәй, дуҫлыҡҡа арналған байрам был ғына түгел. Тағы ла 9 июнь Халыҡ-ара дуҫтар, 25 июнь - Славяндарҙың дуҫлыҡ һәм берҙәмлек, 3 июль - Йәшерен дуҫлыҡ көндәре билдәләнә. 26 сентябрҙә - Күптәнге дуҫтар менән осрашыу, 27-һендә Дуҫ көнө (День дружбана). Ә күрше Беларусь Республикаһында мәктәп уҡыусылары 19 майҙа Пионер дуҫлығы көнөн билдәләй.

Ғалимдар дуҫлыҡ ғүмерҙе оҙайта һәм төрлө ауырыуҙарҙан ҡурсалай, тип иҫәпләй. Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙҙар ир-егеттәргә ҡарағанда дуҫтарға нығыраҡ мохтаж икән. Ә бына күптән түгел үткәрелгән социологик һорау алыу һөҙөмтәһендә Австралиялағы Сидней ҡалаһы иң дуҫтарса мөнәсәбәтле ҡала булыуы асыҡланған. Ә халыҡтар араһында Бразилия һәм Филиппин кешеләре иң аралашыусан, тип табылған. Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда ла халыҡтар араһында дуҫтарса мөнәсәбәт, бер-береңде хөрмәт итеү, теләктәшлек күрһәтеү - яҙылмаған ҡағиҙә, матур йола. Башваҡыста башҡорт шағирҙарының дуҫлыҡ тураһында шиғри юлдарын уҡып, авторҙарын билдәләп ҡарағыҙ.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**28-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Келәм. Калегин. Тәхет. Абҙаҡ. Упҡын. Ағаслыҡ. Иҙеүкәй. Асҡар. Сәсәк. Ихата. Тау. Сатыр. Ләлә. Дана. Хәүеф. Варан. Икар. Картина. Әхлаҡ. Исхаҡов. Тәҡдир.

**Вертикаль буйынса:** Иҙрисова. Александр. Кама. ДНК. Каса. Артист. Ҡайсы. Келәт. Тракт. Исланд. Хисмәтуллин. Какао. Минут. Вы. Уҡа. Сәхрә. Сана. Алты. Нур. Рафиҡ.

ҺОРАУ - ЯУАП



# МАШИНА УРЫНЫН БИЛДӘЛӘҮ

**Нимә ул машина урыны һәм уны нисек законлаштырырға? "Росреестр"ҙың Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы белгестәре яуап бирә.**

Машина урыны - бинаның йәки ҡоролманың бер өлөшө, унда тик транспорт сараларын ғына урынлаштырырға мөмкин. Ул ҡойма йәки теҙөлөш конструкциялары менән сикләнмәй, әммә уның сиге кадастр иҫәбенә ҡуйылырға тейеш. Ихатала, юл ситендәге йәки ер өҫтөндәге туҡталыштарҙағы парковка урындары машина урыны була алмай. Машина урындарының ҙурлығы буйынса сикләүҙәр юҡ. Уның сиктәрен бинаның проект документацияһында күрһәтәләр һәм иҙән йәки ҡыйыҡ өҫтөндә билдәләр менән билдәләйҙәр.

**Машина урынын үҙ милкеңә нисек теркәргә?**

2017 йылдың 1 ғинуарынан һуң файҙаланыуға тапшырылған күп фатирлы яңы йорттар өсөн йортто файҙаланыуға тапшырыуға рөхсәт биргән орган машина урындарын кадастр иҫәбенә ҡуйырға тейеш. Милекселәр "Росреестр"ҙа машина урынына милек хоҡуғын теркәй ала. Документтарҙан өлөшләтә ҡатнашыу тураһында килешеү, ҡабул итеү-тапшырыу акты һәм дәүләт пошлинаһы түләү тураһында квитанция (2000 һум) кәрәк.

2017 йылдың 1 ғинуарына тиклем автотуҡталышта дөйөм милек хоҡуғында өлөш буларак теркәлгән машина урындары өсөн өлөш хужалары, машина урыны сиктәрен билдәләп һәм милек хоҡуғын теркәп, үҙ өлөшөн бүлә ала. Кадастр иҫәбенә алыу һәм милек хоҡуғын теркәү тураһындағы ғариза менән кадастр инженерына һәм "Росреестр"ға мөрәжәғәт итегеҙ. Шулай уҡ милекселәрҙең дөйөм йыйылышының мөлкәт менән файҙаланыу тәртибен билдәләү тураһындағы килешеүе йәки ҡарары кәрәк буласаҡ.

**Әгәр машина урыны элек торлаҡ булмаған бина сифатында теркәлгән булһа, нимә эшләргә?**

Элек бирелгән документтарҙы алмаштырыу талап ителмәй. Әммә милексе үҙенең күсемһеҙ милек объекты тураһындағы мәғлүмәттәрҙә машина урыны тураһында мәғлүмәт булыуын теләһә, ул "Росреестр"ға Берҙәм дәүләт күсемһеҙ милек реестры мәғлүмәттәренең үҙгәреүен иҫәпкә алыу тураһында ғариза бирә ала. Шул уҡ ваҡытта торлаҡ булмаған бинаға хоҡуҡты билдәләүсе документтар тапшырырға кәрәк.

**Йорт ихатаһында парковка урынын законлаштырып, ҡойма ҡуйырға мөмкинме?**

Быны үҙ белдегең менән эшләү законһыҙ. Әгәр йорт яны биләмәһе дөйөм милектә икән, дөйөм йыйылышта ҡойма ҡоролмаһын ҡуйыу тураһында ҡарар ҡабул ителергә тейеш. Башҡа осраҡтарҙа мәсьәлә Башҡортостандың Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығы ҡарамағында - ер участкаһы ҡуртымға бирелергә мөмкин.

САНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# АФАРИН, ҺАЛДАТ!



**Сибай концерт-театр берекмәһе артисы Әлфир Замановҡа "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы" тигән маҡтаулы исем бирелде.**

Артисҡа наградаһы Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачёв тапшырҙы. Башҡортостан Республикаһының маҡтаулы исеме - артистың ижади ҡаҙаныштарын таныу билдәһе, тип билдәләне парламент спикеры. "Әлфир Заманов - башҡорт сәхнәһенең сағыу йондоҙо, бик күп ижади конкурстар еңеүсеһе һәм призеры, башҡорт милли мәҙәниәтен популярлаштырыусы, - тине Константин Толкачев. - 2022 йылда яҡташыбыҙ мобилизация буйынса саҡырылды, агитбригада составында яугирҙарҙың рухын күтәрә. Уның үҙенсәлекле һәләттәре хәрби музыка үҫешенә өлөш индергән өсөн Рәсәй Оборона министрлығының "Генерал-майор Александр Александров" миҙалы менән билдәләнде. Башҡортостан Республикаһының маҡтаулы исеме - артистың ижади ҡаҙаныштарын таныу билдәһе". Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Сибай йырсыһы Әлфир Заманов һәм уның коллегалары 2022 йылдың сентябрендә өлөшләтә мобилизация сиктәрендә Махсус хәрби операцияға юлланды. Яҡташыбыҙ интернет селтәрендә йырлай-йырлай фронтҡа китеп барған мобилизацияланған артистарҙың киң таралған роликтарынан һуң билдәлелек яуланы. Видеола яугирҙар баянға ҡушылып, Ҡадир Даян шиғырына яҙылған "Шайморатов генерал" йырын башҡара.

# АҠ АЙЫУ БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШӘ



**Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фондының гранты арҡамында популяр йәнһүрәт геройҙары - Гриз, Панда, Аҡ айыу башҡорт телендә һөйләшә башланы. Идея авторы - радиожурналист Айбулат Сисәнбаев.**

- Йәнһүрәт сериалында өс айыу: Гризли (Гриз), Панда (Пан-Пан) һәм Аҡ айыуҙың тормошо бәйән ителә. Айыуҙар интернет селтәрендә кешеләр араһында популяр булырға тырыша, йәмғиәттә йәшәргә өйрәнә, шәхси көрсөктәр аша үтә. Йәнһүрәт үҙ-ара ярҙамға, дуҫлыҡҡа, изгелеккә өйрәтә, ул бар донъяла популяр. Мин уның башҡортсаһы ла булыуын теләнем, - ти Айбулат. Интернетта башҡорт телендә популяр һанлы контенттың аҙ булыуы уға ошо проектҡа тотонорға этәргес биргән. Башҡортса тауышландырылған йәнһүрәттәрҙе социаль селтәрҙәрҙә, шул иҫәптән башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү ойошмаһының "Бәйләнештә"ге төркөмөндә ҡарарға мөмкин. Хәбәр ителеүенсә, Башҡортостан Башлығының кинематография өлкәһендәге гранттары конкурсына ғаризалар ҡабул ителә.

# РАМАҘАН - КРЕМЛДӘ!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә йәш яҡташыбыҙҙың йыры менән уртаҡлашты.**

"Ҡарағыҙ әле, башҡорт малайы Рамаҙан Биккинин "Онотмағыҙ" йырын ҡалай йөрәккә үтеп инерлек итеп, бар күңелен һалып башҡара. Был Кремлдә "Еңеү музейы" проекты конкурсынан өҙөк. Йәш артист тураһында - минең "Һоҡланғыс кешеләр тормошо" рубрикаһында. Рамаҙанға 12 йәш. Ғаиләһе менән Өфөлә йәшәй, Нариман Сабитов исемендәге 1-се балалар музыка мәктәбендә уҡый. Әсәһе уны 7 йәшендә музыкаға алып килгән, тәүҙә ул баян класында шөғөлләнгән, һуңынан вокалға күскән. Рамаҙан рус, башҡорт һәм инглиз телдәрендә йырлай. Бер нисә конкурста еңеү яулаған, афарин! Малайҙың уңышы - уның ата-әсәһе Рәсимә Фәрүәз ҡыҙының һәм Илдус Исламғәле улының оло хеҙмәте. Улар балаларында матурлыҡҡа һөйөү тәрбиәләй, милли мәҙәниәт менән таныштыра. Ысын илһөйәрҙәр үҫтерә. Әйткәндәй, Рамаҙандың ғаиләһе ижади, уның апайы Алһыу Өфө сәнғәт училищеһының эстрада-джаз йыры бүлегендә уҡый". Яҙмаһының аҙағында Радий Хәбиров барыһына ла тыныслыҡ һәм изгелек теләй.

# КӨҘ РОМАНТИКАҺЫ

**Август аҙағында өфөләрҙе II "Көҙ романтикаһы" классик музыка фестивале көтә. Баш ҡалабыҙҙың 450 йыллығына бағышланған сара 22-24 августа Совет майҙанында ойошто475 ола.**

Башҡортостан Дәүләт оркестрының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 22 августа фестивалде асыу тантанаһында баш дирижер, Башҡортостандың халыҡ артисы Дмитрий Крюков етәкселегендәге Башҡортостан Республикаһының дәүләт академия симфоник оркестры, Рәсәйҙең халыҡ артисы, пианист Денис Мацуев, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы Илдар Абдразаков һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы Асҡар Абдраҙаҡов ҡатнаша.

Фестивалдең икенсе көнөндә дирижер Камалетдин Уринбаев етәкселегендәге Үзбәкстан Республикаһының Дәүләт симфоник оркестры сығыш яһай. Солистар: Бегисбай Темирбаев (тенор), Хурсандбек Атамуратов (баритон), Маман Жумабаев (баритон), Отемис Джуманиязов (тенор), Женисбек Пиязов (бас-баритон). Фестивалде ябыу тантанаһына Евгений Светланов исемендәге Рәсәй дәүләт академия симфоник оркестры килә. Оркестрға Дмитрий Крюков дирижерлыҡ итә. Был фестиваль Башҡортостан Республикаһы Башлығы булышлығында үткәрелә, инеү ирекле. 6+

# ӘЙТКӘНДӘЙ...

**2024 йылда Башҡортостанда иң яҡшы музыкаль әҫәрҙәрҙе асыҡлау буйынса республика конкурсы бара. Мәҙәниәт министрлығының конкурсты үткәреү тураһында бойороғо рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған.**

Конкурсты ойоштороуҙа Башҡортостан Республикаһының Дәүләт академия симфоник оркестры һәм Композиторҙар союзы төбәк йәмәғәт ойошмаһы ҡатнаша. Композиторҙарҙың йәше һәм гражданлығы мөһим түгел, урта йәки юғары профессиональ музыкаль белем талап ителә.

Конкурстың маҡсаты - Башҡортостандың театр-концерт ойошмалары репертуарына индереү өсөн әҫәрҙәрҙе тәкдим итеү, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт академия симфоник оркестры йыйылмаһында заманса музыка сәнғәте коллекцияһын тулыландырыу. Шулай уҡ һәләтте авторҙарҙы, башҡарыусыларҙы һәм композиторҙарҙы асыҡлау, уларға ярҙам итеү. Конкурсты үткәреү ваҡыты - 2024 йылдың 26 августынан 16 сентябренә тиклем.

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# КӨСҺӨҘҘӘРҘЕ ТАШАЛА

**Таныш түгел таныштар. Шулай атарға тура килә ҡалын-ҡалын китаптарҙа тупланған ҡайһы бер һүҙҙәрҙе. Сөнки улар ысынлап та матур әҙәбиәттә, тарихи ҡомартҡыларҙа йыш осраһа ла, хәҙерге телмәр өсөн ятыраҡ яңғырай. Шундай бер нисә һүҙҙе яңынан танытабыҙ.**

**Тарма** һүҙенең бер үк мәғәнәләге иптәше - "киндер". *Тарма орлоғо. Тарманан май һығыу. Тарма сүсе.*

**Татау.** "Тартыу, һуҙыу" тигәндә белдергән һүҙ. *Тирене татау. Йыуылған әйберҙе, ултырмаһын өсөн, татап киптереү.*

**Ташалау.** Кемделер яҡлау, ҡурсыу күҙҙә тотолһа, "ташалау" һүҙен ҡуллана алабыҙ. *Дошмандан ташалау. Көсһөҙҙө ташалау.*

**Ташаяҡ. Таштабаҡ. Таштуҫтаҡ.** Был һүҙҙәр барыһы ла һауыт-һабаны белдерә. Ташаяҡ - ҙур булмаған ҡом һауыт. *Тоҡсалы ташаяҡ.* Таштабаҡ иһә киң ҡом һауыт була. *Таштабаҡҡа аш һоҫоу.* Таштуҫтаҡ - таштабаҡтан бәләкәйерәк ҡом һауыт. *Таштуҫтаҡ оҫталау.*

**Шулай итеп, туған телебеҙҙе ташалауҙың төп шарты - уны өйрәнеү, белеү һәм әүҙем ҡулланыу.**

**НУРБИКӘ** әҙерләне.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТҮРӘ КҮП БУЛҺА...

## дауы ла күп

Кесегә шәфҡәт итеп юл бир, олоға хөрмәт итеп ҡул бир.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Изге исемең ҡайһы саҡта эшләгән эшеңә түгел, өндәшмәй тороуыңа ла бәйләнгән; гонаһлы икәнһең, исмаһам, һаҡ бул.

**(Балтасар Грасиан).**

Гонаһ ҡылыу ҙа, изгелек эшләү ҙә шул бер үк ысулдар - уй, һүҙ һәм эш ярҙамында башҡарыла.

**(Георг Лихтенберг).**

Иң ҙур әхлаҡһыҙлыҡ - белмәгән эшеңә тотоноу.

**(Наполеон Бонапарт).**

Кеше күңелендә бик тиҙ тоҡана торған берҙән-бер тойғо - ул ҡуралмаусанлыҡ.

**(Альфред де Мюссе).**

Нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, был донъялағы бөтөн бәлә һәм бәхетһеҙлектәр йыш ҡына тәпәш буйлы кешеләрҙән сыға; уларҙың холҡо оҙон буйлы кешеләрҙекенә ҡарағанда етеҙерәк тә, һыйышмаусан да.

**(Эрих Ремарк).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер кеше дөйәһе менән йәйшел оазис эргәһенән үтеп бара. Шул саҡ әле генә ерҙе тишеп килеп сыҡҡан пальма үҫентеһе уның күҙенә салынып ҡала. Ниңәлер оҡшамай кешегә был үҫенте. Ул дөйәһенән төшөп, бер ҙур таш ала ла, уның менән палма үҫентеһен баҫырып ҡуя. Шунан уны аша атлап, дөйәһенә атланып ары китә. Пальма үҫентеһе үҙенең өҫтөндәге ауыр ташты алып ташларға күпме генә тырышһа ла булдыра алмай. Шунан ул икенсе тактика һайлай. Таштың ауырлығынан баҫылып ҡалмаҫ өсөн тамырҙарын тәрәнгәрәк йәйеп ебәреп, төптән нығынырға ҡарар итә. Тамырҙарын ни тиклем тәрәнгәрәк төшөргән һайын, ул дымға нығыраҡ туйына, шуға ла уның олоно ла ныҡый, көсәйә бара. Пальма тирә-яғындағы башҡа ағастар ҡуләгәһенән ҡотолоп, уларҙан юғарыраҡҡа күтәрелә, иң кеүәтле ағасҡа әйләнә.**

**Бер нисә йылдан баяғы кеше тағы ла йәшел оазис янынан үтеп бара. Ул ҡапыл бынан бер нисә йыл элек үҙе имгәтеп, таш менән баҫырып киткән пальма тураһында иҫенә төшөрә һәм дөйәһенән төшөп, баяғы ташты эҙләй башлай. Ләкин күпме генә эҙләһә лә уны таба алмай. Үҙенә зыян эшләүсе кешене танығас, пальма эйелеп, уға түбәһендәге ташты күрһәтә. Шунан палма былай ти: "Рәхмәт һиңә, кеше, миңә зыян итәм тип, мине көслө иттең..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 24029

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
25 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2750
Заказ - 1242

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.